ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
9-15 июль (майай) 2022
№27 (1017)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Аңраланыу пандемияһымы?**

2-3

**Зарланмайыҡ,**
зарланыу рухиәтте үлтерә, көсөбөҙҙө кәметә

6

**Сит тарафтарҙа ла...**
үҙлегеңде һаҡлап, үҙең булып йәшәп була!

8

**Ауылдарҙы йәшәтеүселәр...**
ошо уҡыу йортонда әҙерләнә инде

12-13

**ТВ-программа** 14

***Һин бейеккә күтәрелгән һайын яуыз бәндәләрҙең көнләшеүенә дусар ителәһең. Шуға ла һин юғарыға күтәрелеүҙән түгел, ә унан осоп төшөүҙән һаҡлан.***

***(Андре Жид).***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**Ҡатмарлы заман тыуып тороуға ҡарамаҫтан, ил етәкселеге балалы ғаиләләр һәм әсәлекте социаль яҡлау сараларын иғтибар үҙәгендә тота. Ҡайһы берәүҙәр был йәһәттән ҡаҙна сәйәсәтенә ҡарата һаҡсыл булыу кәрәклегенә ишаралай башланы...**

***Сергей МИРОНОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты, "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" партияһы рәйесе:*** Демография буйынса былтырғы йылдарҙағы кеүек антирекорд ҡабатланмаһын, тиһәк, тыуым һәм күп балалылыҡ мәсьәләләре буйынса киң ҡоласлы ярҙам саралары күреүҙе дауам итергә кәрәк. Быйылғы йылдың ғинуар - апрель айҙарында ғына ла тыуым кимәле 6,2 процентҡа кәмене. Халыҡ һанының тәбиғи кәмеүе күрһәткестәре тағы ла хәүефлерәк: былтыр беҙ миллиондан ашыу, ә быйылғы ғинуар менән апрель араһында ғына ла 311 мең кешене юғалттыҡ. Бында, әлбиттә, үткән 90-сы йылдарҙағы демографик көрсөк, уның өҫтәүенә пандемия күрһәткестәре лә үҙ ролен уйнаны. Илдә ниндәй генә объектив хәл-ваҡиғалар булыуға ҡарамаҫтан, бындай юғалтыуҙарға килешеп ҡарау һис ярай торған эш түгел. 2019 йылда уҡ әле беҙҙең фирҡә балалы ғаиләләргә ярҙам программаһы - балалы ғаиләнең һәр ағзаһына 10 мең күләмендә "ата-әсәгә айлыҡ эш хаҡы" тәртибен индереү программаһын тәҡдим иткәйне. Был балалар тәрбиәләү менән мәшғүл ата-әсәләргә ипотека кредиттарын бүлеп түләүҙе, ә инде өсөнсө бала тыуғандан һуң дәүләт тарафынан был кредитты ябыу мәсьәләләрен үҙ эсенә ала ине. Өсөнсө балаға әсәлек капиталы индереү ҙә тыуым мәсьәләһенә булышлыҡ итер ине. Әйтергә кәрәк, илдә был йүнәлештә һәр төрлө ярҙам саралары күрһәтеү туҡтамай. Әле бына ошо араларҙа РФ Президенты В.Путин 2022 йылдан башлап балаларға пособиелар һәм яңы түләүҙәрҙе индексациялау хаҡында иғлан итте. Президент шулай уҡ ҡатын-ҡыҙҙың йөклөлөк осоронан алып балалары 18 йәшкә еткәнсә Рәсәй ғаиләләренә берҙәм ярҙам системаһы булдырыу хаҡында ла белдерҙе. Рәсәйҙә балаға тыуғандан алып 18 йәшкә еткәнсе яңы пособие төрө барлыҡҡа киләсәк. Былар бөтәһе лә илдә тыуым мәсьәләһен тотороҡландырыуға булышлыҡ итәсәк. Рәсәйҙә әлеге ваҡытта барлығы 145,4 млн кеше иҫәпләнә, ләкин икһеҙ-сикһеҙ биләмәләргә эйә илебеҙҙең нормаль үҫешен тәьмин итеү өсөн әлеге һандан ике тапҡырға күберәк кеше талап ителә. Халыҡ һанын арттырыуға аҡса йәлләргә ярамай, бының өсөн ил ҡаҙнаһында финанс етерлек. Бик булмаһа, илдәге бай граждандарға прогрессив һалым системаһы индереү ҙә өҫтәмә ярҙам сараһы була алыр ине.

## БАШ ҠАЛАМ...

# САҒЫУ БИҘӘКЛЕ

**"Тау башында балҡый бер ҡала, ул ҡала Өфө тип атала", тип йырлап үҫкән быуын балалары беҙ. Баш ҡаланан йөҙәр саҡрым алыҫлыҡта ятҡан ауылда тыуған һәм Өфөнө тик китаптарҙа ғына күргән кеше өсөн бында килеп, һүрәттәр буйынса ятлап бөткән урындарҙы үҙ күҙең менән күреү ниндәй хистәр уятҡанын кемгәлер аңлауы ла ауырҙыр.**


*Этнография һәм археология музейы бинаһы.*

Быйыл, ниһайәт, Өфөгә юл төштө. Йәшеллеккә күмелгән ҡалала беҙҙе тәүҙә Салауат Юлаевҡа һәйкәл ҡаршы алды. Ошондай шәхесебеҙ һәм уны һынландырған әлегеләй монументаль һәйкәлебеҙ булыуы менән бәхетле халыҡ беҙ.

Автомобиль күперен үткәс, юлыбыҙ артабан Салауат Юлаев проспекты буйлап китте. Манаралары ялтырап әллә ҡайҙан күренеп торған мәсет тирәләй төҙөлөш эштәренең гөрләмәүе бер аҙ күңелде һүрелтһә лә, ул да оҙаҡламай барлыҡ мосолмандарға үҙ ишектәрен асыр, тигән өмөттә юлыбыҙҙы дауам иттек. Меңәрләгән автомобилдәр тегеләй-былай йүгергән проспект үҙенең киңлеге менән оҡшаны. Ләкин юл буйындағы сағыу уттар менән янып торған реклама экрандары ҡараңғыла водителдәргә ҡамасауламай микән?

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺӘР ҒӘМӘЛДЕ...

## фәрештә күҙәтә

**Газондарҙың йәшеллеген, сәскә түтәлдәренең матурлығын, ихаталарҙағы һәм ҡала биләмәһендәге тәртипте, автоһәүәҫкәрҙәрҙең машиналарын газондарға туҡтатыуын фәрештә күҙәтеп торасаҡ.**

Эйе, баш ҡалала "Фәрештә: административ комиссия" автоматлаштырылған мәғлүмәт системаһы эшләй башланы һәм ул барлыҡ административ комиссиялар эшенә индерелгән. Система документтарҙың ҡалыбын ҡулланыу, электрон һанлы ҡултамғa ҡуйыу, почта хеҙмәте өсөн түләү һәм ғәмәлдең статусын автоматик күҙәтеүҙе файҙаланыу иҫәбенә административ эшмәкәрлек процестарын тулыһынса автоматлаштырыу мөмкинлеге бирә. Һәр комиссия өсөн "Дозор-МП" программа-аппарат комплекстары алынған. Улар ғәмәлдәге ҡануниәт талаптарына ярашлы хоҡуҡ боҙоуҙарҙы теркәй һәм фотофакттарҙы артабан программа продуктына күсерә, шул уҡ ваҡытта ҡағиҙә боҙоусыларҙың транспорт сараһының номерҙары исемлеген автоматик рәүештә төҙөй, парковка ҡағиҙәләрен боҙоусының мәғлүмәттәрен ЮХХДИ-ла асыҡлай. Ағымдағы йылда ғына республикала йәшелләндерелгән территорияла парковка ҡағиҙәләрен боҙоуҙың һәм сүп-сар контейнерҙары эргәһенә транспорт сараһы ҡуйыуҙың 10200 осрағы теркәлгән. Программа-аппарат комплекстары ярҙамында ҡала урамдарында тәртип булдырыу ғына түгел, водителдәрҙе автомобилдәрен парковкалауҙа тәртип ҡағиҙәләрен үтәргә өйрәтеү ҙә күҙаллана.

12+

БАШ ҠАЛАМ...

# САҒЫУ БИҘӘКЛЕ

**(Башы 1-се биттә).**

Өфөнөң тарихи үҙәге буйлап сәйәхәт ваҡытында ҡайһы бер биналарҙың төҙөлөшө лә, уларҙы биҙәгән биҙәктәре лә һоҡландырғыс. Мәҫәлән, К.Маркс урамында урынлашҡан Этнография һәм археология музейы бинаһын ғына алып ҡарағанда ла ниндәй матурлыҡ! Эргәһенән көн дә үтеп йөрөгән ҡыҙым: "Атай, һин күрһәтмәһәң, мин иғтибар ҙа итмәйем ул", - ти. Уның биҙәлешендә төрлө дәүер элементтары урын алған, сит илдәрҙә генә үҫкән сәскәләр һүрәтләнгән.

Мин, ғөмүмән, ҡайҙа барһам да биналарға ҙур иғтибар бирәм. Уларҙың барыһы ла тарих шаһиттары бит. Бына, мәҫәлән, Өфөнөң Ленин урамындағы тиҙ ҡапҡылап алыу ресторандары урынлашҡан бинаға иғтибар иткәнегеҙ бармы, йәмәғәт? Ул төҙөлөшө һәм биҙәлеше менән күҙҙең яуын алып, хәҙерге бер типтағы биналарҙан үҙенең ҡупшылығы менән әллә ҡайҙан айырылып тора. Баш ҡаланың Ленин, Пушкин, К.Маркс һәм башҡа ошо тирәләге биналарҙың барыһы ла иғтибарға лайыҡ. Уларҙың һәр береһе Өфөнөң бөгөнгө көн архитектураһына тура килеп кенә ҡалмай, ә йән өргән кеүек.

Ә Туҡай урамындағы совет осоро замандағы элементтарҙан торған стелалар беҙҙең бала саҡ, йәшлек йылдарының матур иҫтәлектәре. Ул ваҡытта эшсе һөнәрҙәренә ҙур иғтибар бүленде, төрлө өлкәлә хеҙмәт иткән эшселәр тәүге урындарҙа торҙо - уларға ҡәҙер-хөрмәт күрһәтелде, депутат булып Мәскәүгә лә улар йөрөнө, баҫыуҙарҙа һәм заводтарҙа ҙур пландар үтәлде. Уларға ҡарап, йәштәр ҙә кәрәкле һәм файҙалы һөнәр һайланы, ауылда йәшәргә ҡалды, ә ауыл йәшәһә, ил дә йәшәй. Шулай уҡ ошо стелалар араһында ҡурайсы башҡорт егетенең һәм бейеүсе ҡыҙҙың да булыуы бик матур күренеш.

Башҡорт дәүләт университеты янында урынлашҡан ҡунаҡхана билдәле бер ракурстан ҡараһаң, бөкләнгән ҡағыҙ битенә оҡшаған һәм был урынға ниндәйҙер үҙенсәлек бирип тора.

Бөгөнгө күҙәтеүем башлыса баш ҡаланың тарихи үҙәгендәге урамдарҙа урынлашҡан биналарға ҡағылды. Артабан Өфөнөң күҙемә күренгән башҡа үҙенсәлектәре тураһында ла яҙырмын, тигән ниәттәмен.

Өфө - матур, йәшел, бөгөнгө менән үткәнде ярашлы итеп берләштергән, туристар өсөн ҡыҙыҡлы ҡала. Туристар өсөн бер нисә йүнәлештәге программа тәҡдим итергә мөмкин, ә бының өсөн ҡаланың ғына түгел, ә ерле халыҡтың да тарихын яҡшы белгән һөнәрмәндәр әҙерләү мөһим.

**Әнүәр ИСӘНБУЛАТОВ.**
**Хәйбулла районы.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# АҢРАЛАНЫУ ПАНДЕМИЯҺЫМЫ?

**Әҙәм балаһы донъяһына һыуҙан, һауанан, тәбиғәттән янаған афәттәрҙән имен-аман ҡотолоу, һис юғында, уларға ҡаршы тороу саралары табыу урынына, аңлы рәүештә тип әйтерлек үҙ башына бәлә табырға әҙер тора. Мәҫәлән, һуңғы 20 йылдар тирәһендә генә тормошобоҙҙо, холҡобоҙҙо киҫкен үҙгәрткән "гаджет"тар тураһында әйткем килә.**



Бәхәсһеҙ, самаһын белеп ҡулланғанда уларҙың файҙаһы баһалап бөткөһөҙ. Ләкин бөтә дөгүә фәҡәт ана шул сама белеүгә ҡайтып ҡала. Саманы белеү-белмәүебеҙгә шик тыумаһа, был турала яҙыуҙың хәжәте лә булмаҫ ине. Яҡын-тирәгеләрҙең гаджеттар менән ҡулланыуын күреүебеҙҙән сама белеү юҡ икәне көн кеүек асыҡ. Ашағанда бер ҡулда - ҡалаҡ, икенсеһендә - телефон. Эшләгәндә бер ҡулда - көрәк, икенсеһендә - телефон. Машинала - бер ҡул рулдә, икенсеһендә - телефон. Йоҡлағанда - ҡосаҡта телефон. Был хәлдәрҙе кемдең күргәне юҡ!

Интернет, телефон, смартфон экрандары бөгөн теләһә ниндәй кәрәкле лә, кәрәкһеҙ ҙә мәғлүмәт менән лыҡа тулы. Ҡайһыныһы файҙалы, ҡайһыныһы зыянлы, ҡайһылары ысын, ҡайһылары ялған икәнен айырыу хатта тормошта ҙур тәжрибә туплаған оло кешегә ауыр. Ә шул уҡ мәғлүмәтте балалар уҡый, күрә һәм хәтер һандығына һалып ҡуя. Тоғромо ул, яңылышмы, дөрөҫмө, ялғанмы икәне шарт түгел, ҡыҙыҡ булһа, булды! Сөнки ҡыҙыҡ мәғлүмәт, сағыу һүрәт менән бүлешеп, йәштәштәренең алдында маҡтанырға була. Хәҙерге тормошта күп нәмәнең - хәбәрҙәрҙең дә, ғәмәлдәрҙең дә, ғәҙәттәрҙең дә һялмалыҡҡа ҡоролғанын улар белеү түгел, яҡшылап аңламай ҙа.

Дебилизация - аңралаштырыу кешенең тормошон, тороошон ғына түгел, бар булмышын үҙгәртеүгә һәләтле "ҡорал".

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Ҡатмарлы заман тыуып тороуға ҡарамаҫтан, ил етәкселеге балалы ғаиләләр һәм әсәлекте социаль яҡлау сараларын иғтибар үҙәгендә тота. Ҡайһы берәүҙәр был йәһәттән ҡаҙна сәйәсәтенә ҡарата һаҡсыл булыу кәрәклегенә ишаралай башланы...***

*Сәлихә ЮЛБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:* Бөгөн илдә балалыҡ һәм әсәлекте яҡлау буйынса күрелгән матди ярҙам саралары хаҡында уҡыйым да, иҫем китә: аҡсалата түләүҙәрҙең иҫәбеһаны юҡ, уларҙы хатта хәтерҙә ҡалдырып та бөтөп булмай. Шулай булырға тейештер ҙә, күрһәң, сөнки заманалар үҙгәрҙе: һаман булһа ил иҡтисадында тотороҡлолоҡ булмауы, эшһеҙлек, ҡиммәтселек мәсьәләләре күп балалы ғаиләләрҙе фәҡирлеккә дусар итте, шунлыҡтан илдә тыуым кәмене. Мин үҙем дә 10 балалы ғаиләлә үҫтем, әсәйем Алтын йондоҙға эйә "Герой әсә" ине. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ата-әсәләребеҙ дәүләттән бер ниндәй социаль ярҙам күрмәне, тип әйтә алам. Хәтерем яңылышмаһа, өс әллә биш йәшкә тиклем генә балаларға биш-алты тәңкәмә шул, күпмелер пособие түләнә ине шикелле, тик уға ғына ғаилә аҫрау, тәбиғи, мөмкин түгел ине. Уның ҡарауы, беҙҙең атайҙар һәм әсәйҙәрҙең бөтөн ғүмерҙәре ҡара таңдан киске эңергә тиклем эштә үтте. Ярай әле, ул замандарҙа ауыл ерҙәрендә лә эшһеҙлек тигән нәмә булманы. Колхоз-совхоздар гөрләп торҙо. Беҙҙең ауыл урман араһында ултырғанлыҡтан, тирәяҡ тораҡ пункттар леспромхозға ойошҡан ине. Ағас эше булғас, әсәйҙәр өйҙә бала ҡараны, ә атайҙар урман ҡырҡыу кеүек ауыр ағас эшендә булды. Енел түгел ине уларға ҙур ғаиләне күтәреүе, ләкин дәүләттән ярҙам көтөп ултырманы улар, фәҡәт үҙ көстәренә таянды. Әйткәндәй, төрлө ғаиләлә төрлөсә лә булғандыр, әммә үҙемдең атайым менән әсәйемә һоҡланып бөтә алмайым: беребеҙ ҙә йыртыҡ кейем менән, йә ялан аяҡ йөрөмәнек, шөкөр. Әсәйебеҙҙең әллә күпме "Әсәлек даны" миҙалы, әлеге әйткән Алтын йондоҙо булһа ла, был наградаларға ла хатта аҡсалата премия тигән нәмә түләнмәне. Апайым менән мине интернат-мәктәпкә бирҙеләр, ләкин атайым икебеҙҙе лә түләп уҡытты. Хатта каникулда бухгалтерия беҙҙең аша атай-әсәйгә биреп ебәргән квитанциялағы һандарҙы ла яҡшы иҫләйем: минең өсөн 7 һум 50 тин, апайыма 9 һум 50 тин түләнә ине. Тимәк, айына ғаилә бюджетынан 17 һум сығып киткән, ә өй тулы бала. Атайҙың яңғыҙ эшләп тапҡан хеҙмәт хаҡы 70-80 һум ине. Атайыбыҙ тырыш, балта эшенә оҫта булды, төп эшенән һуң кистәрен кешеләргә заказ буйынса өҫтәл, диван, этажерка, ултырғыстар, сана, көрәк-һәнәк, дуға, ат санаһы табаны кеүек ағас изделиелар эшләп, өҫтәмә табыш алыр ине. Бына шулай үҫтерҙеләр беҙҙе.

Әле ҡарайым да, ҡайһы бер ҙур ғаиләлеләр тулыһынса тиерлек дәүләткә һалынырға өйрәнеп бара түгелме? Дөрөҫ, дәүләт алдында демографияны арттырыу мәсьәләһе тора, ләкин күп бала тәрбиәләү фәҡәт дәүләт эше генә лә түгел бит, балалар илгә кәрәкле яҡшы, белемле, илһөйәр һәм эшһөйәр граждандар булып үҫһендәр өсөн ғаилә лә көс түгергә тейеш. Ә дәүләтебеҙ тырыша был йәһәттән, матди ярҙам төрҙәрен арттырып ҡына тора, әйтәгүр: әле бына күп балаларға бирелә торған "Ата-әсә даны" орденына аҡсалата түләүҙе арттырырға, ә инде "Герой әсә" наградаһына айырым статус бирелеп, миллион һум түләргә тигән тәҡдим индерҙе Президентыбыҙ Владимир Путин. Инде шунан һуң да бала тапмай ҡараһындар әле!.. Тик баланы табыу менән ата-әсәгә эш бөтмәй, кескәйҙәрен ысын кеше итеп тәрбиәләргә лә кәрәк.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостанда коронавирусҡа коллектив иммунитет 20,7 процент тәшкил итә. Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор етәксеһе Анна Казак: "Хәл бик хәүефле. Европа илдәрендә COVID-19 менән ауырыу осраҡтары арта башланы. Көҙгө эпидемик күтәрелешкә ҡәҙәр ике ай ғына ваҡыт ҡалды", - тип билдәләне. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин әйтеүенсә, һуңғы 30 көндә Башҡортостанда ковид менән сирләү осраҡтары 33 процентҡа кәмегән, әммә эпидемиологик хәлдең яҡшырыуына ҡарамаҫтан, сирҙең яңы тулҡынына әҙерлек бара. Был тәү сиратта миҙгелле гриптың һәм киҫкен респиратор вирус инфекцияһының башланыуына бәйле.

✔Сит илдән ҡайтҡандарға коронавирусҡа ПЦР-тест тапшырырға һәм уның һөҙөмтәһен Дәүләт хеҙмәттәренә һалырға кәрәк. Әгәр ярты йыл эсендә вакцина яһатмаған йәки ковид менән ауырымаған осраҡта. Республика буйынса Роспотребнадзор етәксеһе Анна Казак һүҙҙәренсә, 2 июлдә илдә ковид сикләүҙәре ғәмәлдән сығарылыуға ҡарамаҫтан, ата-әсәләргә балалар учреждениеларында ойоштолған күп кеше ҡатнашлығындағы сараларға йөрөүҙән тыйған кеүек үк, был талап та һаҡлана.

✔Республика етәксеһе Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Екатеринбургта 2010 йылдан уҙғарылып килгән "Иннопром" халыҡ-ара сәнәғәт күргәҙмәһендә ҡатнашты. Был Рәсәйҙә төп индустриаль, сауҙа һәм экспорт майҙансығы. Күргәҙмә барышында Рәсәй төбәктәрендә сәнәғәт сәйәсәтен тормошҡа ашырыу һөҙөмтәләлеге рейтингы йомғаҡтары иғлан ителде. Башҡортостан 93,6 балл менән Мәскәүҙе һәм Мәскәү өлкәһен уҙып китеп, беренсе урынды алды.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров әленән үк 2023 йылда Өфөлә үтергә тейешле Беларусь һәм Рәсәй төбәктәренең X форумына әҙерләнә башларға ҡушты. Радий Фәрит улы билдәләүенсә, 30 июндән 1 июлгә тиклем Гродно ҡалаһында Беларусь һәм Рәсәй төбәктәренең IX форумы уҙҙы. X форум киләһе йылда Өфөлә ойоштороласаҡ. Рәсәйҙең Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко был ҡарарҙы хупланы, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

**✓ Әсәлек капиталын ике төрлө юл менән тотонорға була. Беренсеһе - әлеге ипотеканы ҡаплау йәки йәшәгән фатирҙы иркенәйтеү. Икенсе вариант - әсәлек капиталын тәүге иғәнәгә һалып, яңы торлаҡ һатып алыу.**



Ниндәйҙер милләтте, хатта халыкты һәләкәткә килтереү өсөн фронт асып һуғыш башлау ҙа кәрәкмәй. Кешеләр алдынғы технологияларҙы ҡулланғанда уның ниндәй һөҙөмтәләргә килтеререн күҙаллаймы? Әллә башҡаларға һуҡырҙарса эйәрәме? Шулай тип уйларға дәлилдәр күп. Мәҫәлән, осаһында шыуып йөрөгән бала ата-әсәһенең телефоны өсөн ғауғалаша, уҡыусылар уҡытыусыларына баш бирмәй ыҙғыша, үҫмерҙәрҙе йорт-ҡура тирәһендәге эшкә ҡушыу түгел, үҙенең урынын йыйыштырырға тынлатып булмай. Егерме йылдар самаһы элегерәк ундай аҫау тәрбиәһеҙлек, яһил тәртипһеҙлекте күҙ алдына килтерерлек түгел ине. Бөгөн экрандан һәр хәбәрҙе көйгә һалып һамаҡлап ишеттерәләр, ғәмәлдә сағыу фантикка төрөп "тәтәй" итеп күрһәтәләр. Шуға күрә, балаға экранда күргән, ишеткәндәре атай-әсәй әйткәненән ныгыраҡ тәьҫир итә һәм улар күргән-ишеткәндәрен аңына һеңдереп, ҡабатлай.

Бер яҡтан уйлаһаң, атай-әсәйҙәрҙе лә аңларға була. Рәхәт тә инде: бала гаджетҡа әүрәп тик ултыра. Мыжымай, иламай, ҡамасауламай ҙа. Тағы нимә кәрәк? Ә шул "ҡамасауламаған" ваҡытында ул аңына сүп-сар һүҙҙәр, яҙыҡ ғәмәлдәр һеңдереп ултыра. Экрандан күреп тәрбиәләнгән бала үҫә килә кемде тыңлаясаҡ, кемгә буйһонасаҡ?

Әлбиттә, кемдең йоғонтоһонда тәрбиәләнеп, ҡайҙан, нимә ишетеп, хәтеренә һалған, фәҡәт шуға буйһонасаҡ икәне раҫ!

**Тәүлек әйләнәһенә телефонға текәлеп, ҡасан, ниндәй "тәтәй" күрһәтеүҙәрен көтөп ултырған кеше тормошта уңышҡа өлгәшә аламы? Әйтерҙәр, ала, сөнки ул еңел генә аҡса таба! Эйе, миллиондарҙың бер нисәһе ҡапыл ғына байып китә лә бар аҡсаһын ҡапыл ғына елгә осора. Тик ул "бәхет" күптәргә эләкмәй. Ләкин шул бер нисә кешене, башҡаларҙың аңын арбар өсөн, төрлө экрандарҙан ҡабат-ҡабат күрһәтеп, ҡоторталар. Үкенескә күрә, шул алдаҡҡа эйәргән хәҙерге замана балаһы телефон, смартфон, компьютер ҡолона әүерелеп бара.**

Иң үкенеслеһе - аңраланырыу тажәхмәттән дә зарарлы йоғошло ауырыу балаларҙың иғтибарын арбап алып, ныгынып өлгөрмәгән аңын ағыулай. Ул афәттән балаларын атай-әсәйҙәре аяламаһа, бер кем дә "карантин" иғлан итеп яҡламаҫы билдәле...

"Гаджеты" тигәндә урыҫтар бушҡа ғына "Гад же ты!" тип әрләмәй. Сөнки "гад" - йылан, ә йыландың башҡа йән эйәләрен арбай алыу һәләте бар икәнен әкиәттәрҙән дә беләбеҙ. Гаджеттарға мөкиббән кеше ваҡыт үтеү менән "сәрәкәбаш"ҡа әйләнә!

Хөкүмәт органдары ҡасан булһа ла интернет менән сикһеҙ иркен һәм тотанаҡһыҙ ҡулланыуға юл ҡуйасаҡ. Был - бәхәсһеҙ! Ләкин ул көндө битараф көтөп ултырыу төҙәтә алмаҫлыҡ һәләкәткә килтереүе ихтимал.

Йәшәү мәғәнәһе - ваҡытлыса һәм яһалма алдатҡыстарҙа түгел, ә мәңгелек ҡиммәттәрҙе үҙләштереп, тыуған еренә файҙалы булыуҙа, тип әйтер инем мин йәштәргә.

### Алдынғылыҡ

*Әллә ниндәй замана был:*
*Кешеләр күп аҙаша,*
*Халыҡтар ҙа бер-беренә*
*Яла яға, ыҙғыша,*
*Әҙәп, ғәҙәтенән яҙа,*
*Бәйнеҙлектә ярыша,*
*Заманаға бәлә һала,*
*Яҙмышына ҡарыша.*
*Хоҙай биргән камил аңын*
*Сүп-сар менән тултыра,*
*Афәт упҡыны ситендә*
*Аяҡ болғап ултыра…*

*Кеме кемдән аҡыллыраҡ,*
*Кеме кемдән байыраҡ,*
*Кеме кемдең арҡаһында*
*Алған ирек, бай(ы)раҡ.*
*Кемдең ҡоралы яҡшыраҡ,*
*Кемдең теле байыраҡ,*
*Алдынғылыҡты яулауҙа*
*Әҙәм теле - ҡай(ы)раҡ!*
*Алдынғылыҡ мәрхәмәттең*
*Йөҙөн һаҡлауҙа түгел,*
*Алдынғылыҡ - әҙәм аңын*
*Ағыулауҙалыр бөгөн…*

**Урал МОСТАФИН.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*

# ТӨРЛӨ ЫСУЛДАРЫ БАР

**Һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, Өфөлә йәшәүселәр өсөн етерлек аҡса күләме айына 150 мең икән. Минең эргә-тирәләге кешеләрҙең айлыҡ килеме был тиклемгә етмәй һәм уларҙың һәр икенсеһе үҙенә өҫтәмә аҡса эшләү юлы эҙләй. Кемдер өҫтәмә эште даими рәүештә башҡара, ҡайһы берәүҙәр ваҡыты-ваҡыты менән төп эшенән тыш, тағы ла килем сығанағы эҙләй. Был яҙмамда үҙем күреп-белгән өҫтәмә килем килтерерлек алымдар тураһында яҙам.**

Бер дуҫым даими рәүештә таксиға сыға. Бер төндә 3 мең һум тирәһе аҡса эшләйем, ти. Ял көндәрендә һәм байрамдар мәлендә килеме бермә-бер арта. Ләкин был ысулдың кире яҡтары ла бар: шәхси машинаһы "туҙа", эш барышында иҫеректәр менән төрлө низағтар килеп тыуа, яҡшылап ял итмәү төп эштә ҡамасаулай, ғаиләһен һирәк күрә.

Курсташым ер алып һатыу менән булыша. Перспективалы урындарҙы ҡарап ҡына йөрөй ҙә, ҡола яланда булыуына ҡарамаҫтан, бер-ике ер бүлеме алып ҡуя. Ә унда йорттар төҙөлөп, юлдар барлыҡҡа килһә, ерҙәрен ҡыйбатайтып һатып та ебәрә. Ул үҙе үтә лә сос, йылғыр, алдан тойомлау һәләте лә бар, шуға күрә был эште яҡшы алып бара. Былтыр, мәҫәлән, күп ҡатлы йорттарҙағы фатирҙарға тотондо. Уҙған йылдың көҙ башында яңы төҙөлә генә башлаған йорттарҙан ике студия бүлмәһе алғайны, февраль айында уларҙың хаҡын икеләтә арттырып һатып та ебәрҙе. 5 ай эсендә арыу ғына үҙенә өҫтәмә килем алды. Әлбиттә, бындай эште башлап китеү өсөн ирекле аҡса кәрәк, шуға барыһы ла был ысулды ҡуллана алмай.

Булгаков ҡасабаһындағы күршем күсермәле мунса эшләп һата. Төрлө төҙөлөш майҙансыҡтарынан, шәхси хужалыҡтарҙан кәрәге ҡалмаған төҙөлөш вагондарын осһоҙ хаҡҡа һатып ала ла, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә сынъяһау итеп мунса эшләп ҡуя. Һорау ҙур, сөнки йылға буйында мунса ҡуйып, ҡуртымға биреүселәр ҙә күп, үҙенең баҡсаһына ла ошондай ҙур булмаған мунсаларҙы ҡулай күреүселәр байтаҡ. Был эшкә тотоноу өсөн оҫта ҡул, буш ваҡыт һәм таһыллыҡ кәрәк. Шулай уҡ әҙер мунсаны рекламалай белеү ҙә мөһим.

Күптән түгел генә республикабыҙҙың матур районында урынлашҡан изге шишмәгә барып ҡайттыҡ. Бына шунда урындағы апайҙар килгән-киткән кешегә үҙенең аҙыҡ-түлеген тәҡдим итеп тора. Юлда йөрөгән кеше тиҙ асыға, ҡайһы саҡта үҙең менән етерлек ашарға ла алмай сығып кителә. Шуға күрә әллә нисә төрлө эслек менән бешерелгән бөйөрөктәрен, буҙа, эсе сөй, сәк-сәк һәм башҡа тәм-томдарын рәхәтләнеп һатып, аҡса эшләп торалар. Шулай уҡ төрлө күләмдәге һауыттарҙа ҡаймаҡ, һөт, ҡорот, эремсек тә тәҡдим итәләр - экологик яҡтан таҙа һәм сифатлы аҙыҡҡа, әлбиттә, һорау ҙур. Афарин, унған апай һәм инәйҙәр, ҡулдарығыҙ һыҙлау белмәһен.

Ҡустымдың малайы студент. Баҫҡан урынында оҫҡон сәсрәтеп торған тырыш егет, ата-әсәһенән бер тин аҡса алмай, үҙе таба. Уның күп төрлө аҡса эшләү ысулдарының береһе - клиенттар табыу. Мәҫәлән, туризм менән булған фирмалар күп беҙҙә. Шулар менән бәйләнеш урынлаштыра ла, уларға клиенттар эҙләй. Уның исеменән килгән һәр турист өсөн фирма уға төрлө күләмдә аҡса түләй. Ә студенттар араһында яңы ер-һыу күрергә әҙер тороусыларҙың күп булыуын иҫәпкә алғанда, айлыҡ килеме байтаҡ ҡына сыға. Шулай уҡ ул риелтор агентлыҡтары менән эшләй, уларға ла клиенттар эҙләй. Уның тәҡдиме менән килгән һәм шул агентлыҡ аша йорт йәки фатир һатып алған кеше өсөн уға 10 меңгә ҡәҙәр эш хаҡы күсерәләр. Әлбиттә, аҡса тип ышаныслыҙ, мутлашыусы фирма һәм агентлыҡтар менән эш алып бармай, ә ышаныслыларын ғына тәҡдим итә.

Бына шундай отҡорҙар һәм тырыштар йәшәй минең янда. Бәлки, кемдер ҡолағына "элер" был ысулдарҙы һәм үҙенә өҫтәмә аҡса эшләү сығанағы итеп алыр, тип яҙҙым.

**Фәрхизә АРҒЫНБАЕВА.**
**Өфө районы Булгаков ҡасабаһы.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

**?**

***Ҡатмарлы заман тыуып тороуға ҡарамаҫтан, ил етәкселеге балалы ғаиләләр һәм әсәлекте социаль яҡлау сараларын иғтибар үҙәгендә тота. Ҡайһы берәүҙәр был йәһәттән ҡаҙна сәйәсәтенә ҡарата һаҡсыл булыу кәрәклегенә ишаралай башланы...***

***Айтуған ЯҠШЫҒОЛОВ, юрист:*** Мәғлүм булыуынса, әсәлек капиталын фатир йә йорт һатып алыу өсөн, шулай уҡ ипотека түләүгә тотонорға рөхсәт ителә. 2020 йылдан алып әсәлек капиталын шәхси йорт төҙөүгә йә булмаһа, төҙөлөп бөтмәгән йорт һатып алыуға файҙаланырға мөмкин. Белеүегеҙсә, әсәлек капиталы ата-әсәгә икенсе, өсөнсө һәм унан һуңғы балалар өсөн бер тапҡыр 693,1 мең һум түләнһә, 2020 йылдың 1 ғинуарынан алып бындай дәүләт ярҙамы сиктәре тағы ла киңәйтелде: ул тәүге бала өсөн дә хатта 524,5 мең һум күләмендә түләнә.

Шул уҡ ваҡытта әсәлек капиталын файҙаланыу маҡсаттары ла арттырылды. Шуларҙың иң мөһиме, ғаиләнең йорт йәки фатир һатып алыу мөмкинлеге. Был йәһәттән әсәлек капиталын ике төрлө юл менән тотонорға була. Беренсеһе - әлеге ваҡытта ғәмәлдә булған ипотеканы ҡаплау йәки йәшәгән фатирҙы иркенәйтеү. Икенсе вариант - әсәлек капиталын тәүге иғәнәгә һалып, яңы торлаҡ һатып алыу. Һөҙөмтәлә йәшәгән фатирығыҙҙан тыш, тағы бер күсемһеҙ милеккә эйә булаһығыҙ, уны ҡуртымға тапшырып, ярайһы килем алыу мөмкинлеген дә иҫтә тотоғоҙ. Балалар тиҙ ҙурая. Мәҫәлән, 18 йәше тулған улығыҙҙың йәки ҡыҙығыҙҙың студент булыуға үҙ фатиры әҙер торасаҡ!

Тап шуға күрә әсәлек капиталын дөрөҫ йүнәлештә, киләсәкте алдан уйлап файҙаланырға кәңәш итәм. Бының өсөн балағыҙ рәхмәт кенә әйтәсәк. Шул уҡ ваҡытта әсәлек капиталын балағыҙҙың уҡыуы өсөн түләп тә уның яҙмышына йүнәлеш бирә алаһығыҙ. Тимәк, ҡаҙна аҡсаһы юғалмай, ул оҙайлы инвестиция рәүешендә баланың киләсәгенә йүнәлеш биреп, уның ил өсөн кәрәкле белгес булып сығыуына булышлыҡ итәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров "Иннопром" күргәҙмәһендә республикала "Амкодор" мебель фабрикаһының ойошторолоуын хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, Беларусь компанияһы республикала предприятиены 2023 йылдың яҙында асырға йыйына. Фабрика "Өфө" индустриаль паркы биләмәһендә урынлашасаҡ.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә эше республикаға сәнәғәт сәйәсәтен тормошҡа ашырыу һөҙөмтәләлеге рейтингында икенсе тапҡыр беренсе урын яуларға мөмкинлек биргән хеҙмәткәрҙәр өсөн награда документтарын әҙерләргә ҡушты. "Беҙ йәнә уңышҡа өлгәштек. Ғинуар - май айҙарында республикала сәнәғәт етештереүе индексы - 106,2 процент (дөйөм Рәсәй күрһәткесе - 102,8 процент), Волга буйы федераль округында 102 процент тәшкил иткән", - тип билдәләне ул.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байгусҡаровты Салауат Юлаев ордены менән бүләкләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Зариф Байгусҡаров - парламенттың түбәнге палатаһында Башҡортостандан иң эшлекле депутаттарҙың береһе. Ул тиҫтәгә яҡын закон проекты авторы һәм авторҙашы булды, уларҙың күпселеге ҡабул ителде һәм эшләй. Ул федераль закон проекттарына йөҙҙән ашыу төҙәтмә индерҙе, уларҙың барыһы ла ҡабул ителде.

✓Башҡортостандың "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" проекты 2021 йыл йомғаҡтары буйынса Рәсәйҙә иң яҡшыһы тип танылды һәм тотош илдә тәҡдим ителгән тәжрибәләр иҫәбенә индерелде. Шулай уҡ үҫмер ҡыҙҙарҙың репродуктив сәләмәтлеге буйынса икенсе башланғыс та алдынғылар рәтендә. Өс йыл акция барышында "Сәләмәтлек поездары"нда 80 мең бала тикшерелгән, Башҡортостандың төпкөл райондарында 54 меңгә яҡын кеше һаулығын тикшерткән.

✓Тарифтар буйынса дәүләт комитетының Башҡортостандың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған ҡарарында халыҡҡа газ өсөн хаҡ билдәләнгән. 1 июлдән аш-һыу әҙерләү һәм һыу йылытыу өсөн файҙаланылған газдың бер кубометры - 7,87 һум, күп фатирлы йорттарҙы йылытыу өсөн ҡулланылған шул уҡ күләмдең хаҡы иһә 6045,55 һум. Дәүләт комитеты мәғлүмәттәре буйынса, тариф 3 процентҡа арткан.

✓ *Ҡарар граждандарҙың дөйөм йыйылышында ҡабул ителде, сөнки улар был сара ауылда хәмер эсеүҙе, шул рәүешле үлем кимәлен кәметергә, ғүмер оҙайлығын арттырырға һәм демографик хәлде яҡшыртырға ярҙам итер тип иҫәпләй.*



ҠЫҪҠАСА

# УҠЫТЫУСЫ ЙЫЛЫ...

**2023 йыл Рәсәйҙә Уҡытыусы һәм остаз йылы итеп иғлан ителде. Владимир Путин ошо хаҡтағы Указға ҡул ҡуйҙы.** РФ мәғариф министры Сергей Кравцов әйтеүенсә, уҡытыусы һөнәре яңы кимәлгә сыҡһын өсөн барыһы ла эшләнә. Һәр белгес профессиональ конкурстарҙа үҙ һәләттәрен күрһәтеү мөмкинлегенә эйә. Быҙдай конкурстарҙың береһе беҙҙең республикала бар - ауыл ерендә эшләүсе йәш уҡытыусыларға гранттар биреү. Башҡортостан Башлығы Указы менән ул йыл һайын үткәрелә. 2022 йылда 690 мең һумлыҡ 25 грант ҡаралған. Башҡортостанда иң яҡшы уҡытыусыларға педагогик эшмәкәрлектәге ҡаҙаныштары өсөн премиялар бирелә. Еңеүселәр 200 мең һум аҡсалата бүләк ала. 2025 йылға тиклем "Ауыл уҡытыусыһы" программаһы ҡаралған, унда ҡатнашыусылар 1 миллион һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған компенсация ала.

✓ **Башҡортостанда "Юғарыға ос!" мәғариф проектының "Сәләмәт йылмайыу" модуле сиктәрендә республика мәктәптәрендә 68 стоматология кабинеты асылды.** Барыһының да лицензияһы бар, балалар стоматологияһы өсөн талаптарҙы иҫәпкә алып, заманса дауалау комплекстары менән йыһазландырылған. "Бала саҡта теш дауалау - мөһимкәтле генә эш. Балалар ҡурҡа, өлкәндәрҙең уларҙы етәкләп йөрөтөргә ваҡыты юҡ. Шуға беҙ Башҡортостан мәктәптәрендә стоматология кабинеттары селтәрен булдырырға ҡарар иттек. Проектты бойомға ашырҙыҡ, - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә. - Быйылғы уҡыу йылында ғына 86 меңдән ашыу уҡыусы теш табиптарына күренде. Уҡытыусылар хаҡында ла хәстәрлек күрәбеҙ". Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, 2022 йылдың аҙағынаса Башҡортостан мәктәптәрендә тағы 12 стоматология кабинеты асыу күҙаллана.

✓ **Башҡортостандың тулайым төбәк продуктын 2024 йылға 2,5 триллион һумға тиклем арттырыу күҙаллана, тип хәбәр итте республика премьер-министры Андрей Назаров.** Уның һүҙҙәренсә, республика быға дәүләт программаһы ярҙамында өлгәшергә мөмкин. "Былтыр йылды 419 миллиард һумлыҡ инвестиция күләме менән тамамланыҡ, был унан элекке йылға ҡарағанда 5,1 процентҡа күберәк (Волга буйы федераль округы буйынса уртаса күрһәткестән юғары). Быйыл беренсе кварталда был күрһәткесте 24,9 процентҡа арттырыуға өлгәшелде. Күҙаллауҙар буйынса тулайым төбәк продукты 2,017 триллион һум тәшкил итә. Беҙ инвестиция мөхите торошоноң милли рейтингында тәүге биш төбәк иҫәбендә үҙ позицияларыбыҙҙы рәҫланыҡ", - тип билдәләне Андрей Назаров. 2024 йылда Башҡортостандың төп капиталына инвестициялар күләме 650 миллиард һумға етер, тиган ышаныс белдерҙе Премьер-министр. Шул рәүешле республика инвестиция рейтингында алдынғы урындарға сығырға мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЕҢЕҮ МЕНӘН ҠАЙТЫҒЫҘ!

**Ошо көндәрҙә "Патриот" паркында Рәсәй Геройы, легендар комдив Миңлегәлә Шайморатов исемендәге ирекле батальонды оҙатыу сараһы үтте. Республика Башлығы Радий Хәбиров яугирҙарға изге теләктәрен еткерҙе һәм батальон командирына подразделениеның хәрби байрағын тапшырҙы.**



Билдәле булыуынса, быҙдай батальонды ойоштороу башланғысын хәрби хеҙмәт ветерандарының республика йәмәғәт ойошмалары тәҡдим итте. Яҡташтарыбыҙҙы бер хәрби сафҡа йыйыу идеяһын башҡа ветерандар, патриот-йәмәғәтселәр һәм Украина биләмәһендә махсус хәрби операция барышында хеҙмәт итеү өсөн контракт төҙөргә йыйынған ирекмәндәр күтәреп алды.

"Хөрмәтле иптәштәр! Ҡәҙерле дуҫтар, яҡташтар! Бөгөн республикабыҙ тарихында үҙенсәлекле көн. 80 йылдан ашыу элек Өфөнөң Совет майҙанында 112-се Башҡорт атлы дивизияһына ошо байраҡ тапшырылған. Бөгөн беҙҙең егеттәр йәнә фашизмға ҡаршы көрәшергә, илебеҙҙе һаҡларға китә. Донбасс менән беҙҙе тығыҙ мөнәсәбәттәр бәйләй. Оҙаҡ йылдар беҙ шунда йәшәгән халыҡҡа ярҙам итәбеҙ. Бөгөн беҙҙең табиптар, төҙөүселәр һәм ирекмәндәр унда эшләй. Әммә уларға хәрби ярҙам да кәрәк. Еңеү менән ҡайтығыҙ. Миңлегәлә Шайморатов исемендәге башҡорт батальоны ирекмәндәре булыуҙың оло хөрмәткә лайыҡ икәнен онотмағыҙ. Хәйерле сәғәттә!" - тип сығыш яһаны Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров батальон яугирҙары алдында.

Хәбәр ителеүенсә, ирекле батальон Ырымбур өлкәһендә хәрби әҙерлек үтәсәк, шунан Украинаға махсус хәрби операция барған урынға йүнәләсәк.

# БЫЛ АУЫЛДА - "ҠОРО ЗАКОН"

**Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы депутаттары Көйөргәҙе районы Яҡут ауылы биләмәһендә алкоголь һатыуҙы тулыһынса тыйыу тураһында закон ҡабул итте.**

"Закон проектын республика парламентына Көйөргәҙе районы Советы индерҙе, - тине Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Әлеге башланғыс менән Яҡут ауылы халҡы сығыш яһаны. Ошондай ҡарар граждандарҙың дөйөм йыйылышында ҡабул ителде, сөнки улар был сара ауылда хәмер эсеүҙе, шул рәүешле үлем кимәлен кәметергә, ғүмер оҙайлығын арттырырға һәм демографик хәлде яҡшыртырға ярҙам итер тип иҫәпләй". Парламент рәйесе билдәләүенсә, республика парламенты быҙдай законды тәүге тапҡыр ҡабул итә. "Айырым биләмәлә "ҡоро закон"ды ғәмәлгә индереү бындай сараның һөҙөмтәлелеген һәм маҡсатҡа ярашлылығын аңлау өсөн кәрәк, - тине Константин Толкачев. - Мәсьәлә ярайһы уҡ бәхәсле. Был йәһәттән минең дә шигем бар. Үҙгәртеп ҡороу осорондағы "ҡоро закон"дың суррогаттың таралыуына һәм халыҡтың ағыуланыуына, шул иҫәптән үлеменә килтергәнен хәтерләйбеҙ. Әммә ул саҡта бер кемдән дә һорап тормағандар - ныҡ тыйылған булған. Әлеге осраҡта барыһы ла башҡаса. Халыҡ үҙе теләп сикләү индерә. Ҡарарбыҙ, нимә килеп сығыр".

# ӘЙҘӘГЕҘ, СӘЙӘХӘТКӘ!

**Республика етәксеһе сәйәхәт итергә теләгән оло быуын вәкилдәре иғтибарына социаль селтәрҙәрҙә "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек. Туризм" программаһы тураһында яңы яҙмаһын тәҡдим итте.**

"Йыш ҡына шулай була: кеше ғүмере буйына тыуып үҫкән районында йәшәй, эшләй. Командировкаларға һәм ял итергә башҡа төбәктәргә бара, ә Башҡортостан буйлап сәйәхәт итмәй. Быны бөтөнләй ғәҙелһеҙлек тип һанайым. Беҙҙә ҡыҙыҡлы урындар бик күп. Хаҡлы ялдағыларҙың да әүҙем, ҡыҙыҡлы, бай тормош менән йәшәүе беҙҙең өсөн бик мөһим. Беҙ уларға үҙенсәлекле республикабыҙҙы күрһәтергә теләй-беҙ", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. Программаның туристик йүнәлеше буйынса маршруттар һаны арттырылды: хәҙер 14 туроператор республика буйлап 42 тур тәҡдим итә. Быйыл программа 10 мең ҡатнашыусыға иҫәпләнгән. Унда 60 йәше тулған ир-егеттәр, 55 йәште үткән, шул иҫәптән ваҡытынан алда пенсияға сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙар саҡырыла. Башҡортостан буйлап йылына бер тапҡыр бушлай сәйәхәткә сығырға мөмкин. Программала ҡатнашыусы өсөн трансфер, страховка, маршрут буйынса 8-10 сәғәтлек экскурсиялар, гид-экскурсовод, медицина һәм социаль хеҙмәткәрҙәр, эсәр һыу бушлай. Ҡатнашыу өсөн долголетие.соцтуризмрб.рф сайтында теркәлергә һәм уңайлы маршрутты, датаны һайлап, теләһә ниндәй турға яҙылырға, йәки ҡала йәки район хакимиәтенә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

# ЙОРТҺОҘҺОҢМО?

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, тәғәйен йәшәгән урыны булмаған кешеләр ҡунып сыҡҡан өсөн аҡса түләмәйәсәк.**

Граждандарҙы социаль хеҙмәтләндереү тураһында закондағы был үҙгәрештәрҙе Дәүләт Йыйылышының профилле комитеты хупланы. Парламент спикеры Константин Толкачев әйтеүенсә, документта был категорияға ҡараған граждандарға ярым стационар төрҙәге социаль хеҙмәт бушлай күрһәтелә. Социаль хеҙмәтләндереүҙең ярым стационар төрө тип бер төн ҡундырып сығарыуҙы әйтәләр. Өфөлә тәғәйен йәшәү урыны булмаған кешеләргә 50 койка-урынлыҡ республика ярҙам үҙәге эшләй. "Әле үҙәктең хеҙмәте түләүле - бер төнгә 100 һум. Әммә өйһөҙҙәрҙең йыш ҡына бөтөнләй аҡсаһы булмай. Түләүһеҙ социаль хеҙмәткә хоҡуҡлы тип танылһа, ҡунып сыҡҡан өсөн уларға аҡса түләргә тура килмәйәсәк", - ти Толкачев. Әлеге ваҡытта ул ошо юҫыҡтағы берҙән-бер дәүләт учреждениеһы. Бынан тыш, йәшәү урыны булмағандарға коммерция булмаған һәм дини ойошмалар ярҙам итә. Уларҙың ярҙамы бушлай. Закон проекты шулай уҡ түләүһеҙ социаль хеҙмәткә хоҡуҡты билдәләү өлкәһендә лә үҙгәрештәр индерә. Мөрәжәғәт иткән көнгә граждандың уртаса килеме республика хөкүмәте билдәләгән йәшәү минимумының бер ярым дәүмәленән түбән йәки тигеҙ булһа, был хеҙмәттәр бушлай күрһәтеләсәк.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев 2022 йылдың июнь айы йомғаҡтары буйынса "Медиалогия" компанияһы белгестәре әҙерләгән Волга буйы федераль округы төбәктәренең баш ҡала хакимиәте башлыҡтары медиарейтингында икенсе урынды алды. Беренсе урында - Түбәнге Новгород башлығы Юрий Шалабаев, өсөнсө урында -Ҡаҙан мэры Илсур Мөхәмәтшин. Ратмир Мәүлиев социаль селтәрҙә үҙенең эшмәкәрлеге менән даими таныштыра, телеграм-канал алып бара, унда ҡала объекттарына барыуы, халыҡ менән осрашыуы тураһында яҙмалары менән уртаҡлаша.

✓Альберт Маликов Өфөнөң Орджоникидзе районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Альберт Маликов 1972 йылда Өфөлә тыуған. Өфө дәүләт авиация техник университетын, Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған.Бынан алда Альберт Маликов республиканың Иҡтисад һәм монополияға ҡаршы сәйәсәт министрлығында, Территориаль үҫеш агентлығында, ә 2014-2022 йылдарҙа Башҡортостан Башлығының муниципаль берәмектәр менән эш итеү идаралығында эшләгән.

✓Мосолмандарҙың изге байрамы - Ҡорбан гәйетендә Өфөлә ҡорбан салыу йолалары ҡаланан ситтә: Зинино ҡасабаһы янында ("Каруан" сауҙа үҙәге алдындағы майҙанда), шулай уҡ Төньяҡ автовокзал биләмәһендә ойоштоқола. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Ҡорбан байрамы - мосолмандарҙың ике төп байрамының береһе, 2022 йылда уны 9 июлдә билдәләйҙәр. Йола буйынса, ҡорбан итен һарыҡ, дейә йәки һыйырҙы килтерергә була. Шуны аңлау мөһим: ҡорбанға салынған мал тәү сиратта хәйер биреү, яҡындарҙы һәм дуҫтарҙы һыйлау өсөн тәғәйенләнгән.

✓Өфөлә Республика Хәрби Дан музейында "Башҡортостан ыласыны" күргәҙмәһе асылды. Күргәҙмәлә ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевтың балауыҙ һыны менән инсталляцияны, фотоһүрәттәрҙе, СССР осоронда осоусыларҙың махсус кейем һәм авиация атрибутикаһын күрергә мөмкин. Легендар осоусының 100 йыллығы уңайынан 9 июлдә "Первушин" биләмәһендә ҙур авиабайрам ойоштороla. Был көндә тотош Рәсәйҙән 50-нән ашыу самолет яңғыҙ һәм төркөмлө пилотаж программаларын күрһәтә. Сара көндәҙгә сәғәт 1-ҙә башлана һәм киске 8-ҙә тамамлана.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨЛӘСӘЙҘӘР ӨСӨН...



**Бөгөн Башҡортостанда 550 меңдән ашыу баҡсасы 1489 коммерция булмаған ойошмаға берләшкән. Уларҙың 80 проценттан ашыуы Өфө, Стәрлетамаҡ агломерацияһына тура килә. Күптәр участкаларында йәшелсә-емеш үҫтерә һәм артып ҡалғанын һатыуға сығара.**

БР Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, төбәктәге йәшелсә культураларының 86 процентын халыҡ үҙе үҫтерә. Әммә барыһы ла, бигерәк тә оло йәштәгеләр, баҡсалағы фиҙаҡәрлегенән файҙа алырға мөмкин икәнен белмәй. Башҡортостанда урамдарҙа рөхсәт ителмәгән урындарҙа һатыу иткән өсөн штраф түләүҙәренең бөтөрөлөүен пенсияла булған баҡсасыларға ярҙам, тип билдәләргә мөмкин. Быға тиклем урам сауҙаһы өсөн 500-3000 һум, ә инде ҡабат эләккәндә 4000-5000 һум штраф һалына ине. "Үҙ ҡулдары менән тәрбиәләп үҫтергән йәшелсә-емешен һатыусы өләсәйҙәрҙе ҡыуырға түгел, ә уларға шарттар булдырырға, урындар эшләргә кәрәк. Шулай уҡ еңел булмаған заманда уларҙың йәшелсә-емешен, тәмләткес үләндәрен һатып алыуығыҙҙы һорар инем. Улар өсөн бөгөн һәр һум мөһим әһәмиәткә эйә", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

Республика етәксеһе шулай уҡ ҡала-райондарҙа бушлай сауҙа урындары булдырырға ҡушты. Әле Өфөлә 677 нөктәне үҙ эсенә алған 35 майҙансыҡ бар, исемлек ҡала хакимиәте сайтына элеңгән. Магазиндар һәм супермаркеттар, даими ауыл хужалығы йәрминкәләре үткән майҙандарҙа ла баҡсала үҫтерелгән продукция менән һатыу итеү урындары булдырылған. Участкаһы 5 сутыйҙан кәмерәк булған милекселәргә сауҙанан килгән килемгә һалым һалынмай. Төп шарт - урындағы хакимиәттән һәм баҡсасылар берләшмәһенән продукцияның шәхси ерҙә үҫтерелеүен раҫлаған белешмә булыуы. Ҡайһы берҙә, әлбиттә, оло йәштәге баҡсасылар өсөн тәғәйенләнгән урындарҙы икенсе һатыусылар йәки такси машиналары биләй, ә ололарҙан ҡуртым өсөн 200-150 һум аҡса алына. Былдай аңлашмаусылыҡты бөтөрөү өсөн властар төрлө варианттар эҙләй.

Баҡсаларҙан сауҙа урынына "Башавтотранс"тың апрелдән октябргә тиклем йөрөгән 59 маршруты алып барып еткерә. Был маршруттарҙа барлыҡ льготалар, шулай уҡ "Алға" картаһының "Бәхетле сәғәт" акцияһы ла ғәмәлдә. Киләсәктә был акцияны Ҡариҙел аръяғына паромда сығыусылар өсөн дә ҡулланыу күҙаллана.

Әгәр ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында ҡалаға сығып булмай икән, үҫтерелгән емеш-еләкте ауыл хужалығы ҡулланыуы кооперативтарының береһендә ҡабул итәсәктәр. Былтыр улар халыҡтан 1 мең тонна картуф, 1,1 мең тонна йәшелсә, 400 тонна тәмләткес үләндәр һ.б. һатып алған. Кооперативта ҡатнашыусылар үҙ эшмәкәрлеге өсөн өҫтәмә килем дә ала.

Йорт хужалығы бюджеты өсөн йорт эргәһендәге участкала үҫтерелгән йәшелсә һәм картуфҡа дәүләт биргән субсидия ла ярап ҡалыр. Киләһе йылдан башлап үҙмәшғүл баҡсасыларға элиталы орлоҡ һатҡан өсөн аҡса түләй башлаясаҡтар, түләү гектарынан сығып иҫәпләнә.

Тиҙҙән баҡсасыларҙы республика вуздарының береһендә уҡыта ла башлаясаҡтар. Башҡортостан Башлығы улар өсөн махсус белем биреү программаһы эшләргә ҡушҡан. Ул баҡсаны заманса тәрбиәләү һәм төрлө культураларҙы үҫтереү серҙәре буйынса онлайн-курстар һәм практик дәрестәрҙән торасаҡ.

**Иван ВАВИЛОВ.**

---

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

## ЮБИЛЕЙ АЙҠАНЛЫ...

**Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығы алдынан баш ҡала ҙур төҙөлөш майҙанын хәтерләтә.**

Башҡаса булыуы мөмкин дә түгел, сөнки ҙур датаға тиклем баш ҡалала бер нисә спорт объекты, ҙур китапхана төҙөлөргә, мәҙәниәт учреждениелары һәм парктар ремонтланырға, Октябрь революцияһы урамы үҙгәртелергә, бер нисә яңы йәмәғәт киңлеге яңыртып төҙөлөргә һәм тормош, хеҙмәт юлы Өфө менән бәйле булған бер нисә арҙаҡлы шәхескә һәйкәл ҡуйыу ҡарала.

Ошо объекттарҙың һәр береһенең ҡурсалаусылары бар, улар ҡаланың үҫешенә һәм киләсәгенә битараф булмаған билдәле кешеләр. Мәҫәлән, Олимпия уйындары, ике тапҡыр донъя һәм Европа чемпионы Аделина Заһиҙуллина, Ижтимағи халыҡ фронтының Башҡортостандағы төбәк башҡарма комитеты башлығы Виталий Брыкин, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа "Берҙәм Рәсәй" сәйәси партияһы фракцияһы етәксеһе урынбаҫары Елена Родина, өс тапҡыр Европа чемпионы, Олимпия уйындары призеры һәм чемпионы, Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры Тимур Сафин.

Шулай уҡ республика Башлығы Радий Хәбиров китапхана ҡурсалаусыһы булырға Мостай Кәрим исемендәге фонд директоры Әлфиә Кәримоваға, билдәле опера йырсыһы Илдар Абдразаҡовҡа, БР Йәмәғәт палатаһы етәксеһе Шамил Вәлиевҡа тәҡдим иткәйне. "Берҙәм Рәсәй" сәйәси партияһының төбәк башҡарма комитеты етәксеһе Руслан Насретдинов - Киров районының Рыленко һәм Пугачев урамдары сатындағы таранспорт сиселеше төҙөлөшө ҡурсалаусыһы.

---

*ҠЫҪҠАСА*

## ИРЕТӘБЕҘ УНЫ!

**Баш ҡалала яңы ҡар иретеү пункты проектлана һәм ҡар йыйыу өсөн майҙансыҡ урыны эҙләнә.** Тәүге ошондай объект Трамвай урамында 2009 йылда төҙөлә, әммә уның ҡеүәте етерлек түгел. Тәүлегенә 1500 кубометр ҡар иретеүгә һәләтле икенсе объектты Сәғит Агиш урамында төҙөү, ә иҫкеһенең ҡеүәтен тәүлегенә 1000 кубометрға тиклем арттырыу күҙаллана. Ғөмүмән, муниципаль властар Өфөлә шундай 4 объект зарурлығын белдерә. Әммә ҡар иретеү пункттары ҡаланың ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алмай һәм ҡар йыйыу урындары ла кәрәк. Уларҙың күберәк булыуы транспорт логистикаһын яҡшыртасаҡ һәм ҡар туҡтауһыҙ яуғанда урамдарҙы таҙартыуҙы тиҙләтәсәк. Ҡар менән көрәштә коммуналь техниканың етешмәүе лә етди проблема булып ҡала. Быйыл республика бюджетынан 88 берәмек техника һатып алыуға 500 миллион һум аҡса бүленгән, ҡала бюджетынан - 19 миллион һум. Әлеге ваҡытта 61 машина алынған, йыл һуңына тиклем коммуналь техника паркы 613 берәмек буласаҡ.

✓ **Баш ҡалала Киров, Родионов, Революцион, Владивосток урамдары һәм Салауат Юлаев проспекты менән сиктәш кварталды төҙөү проекты раҫланған.** Ул ҡулланылмаған склад, коммуналь-көнкүреш һәм производство биналарын һәм ҡоролмаларын, тимер гараждарҙы һүтеп алыуҙы күҙаллай. Был урам-юл селтәрен булдырыу, шулай уҡ капиталь төҙөлөштөң яңы объекттарын урынлаштырыу өсөн кәрәк. Владивосток урамы буйында төкәтелгән биналары, мәктәпкәсә белем биреү үҙәге, 90 урынлыҡ ер аҫты парковкаһы булған 27 ҡатлы торлаҡ йорт төҙөү планлаштырыла. Кварталдың төньяҡ өлөшөндә 150 урынлыҡ балалар баҡсаһы булыуы проектлана. Үҙәк өлөштә мәҙәни-ял үҙәге төҙөү күҙаллана. Революцион урамы буйында 80 парковка урыны булған физкультура-һауыҡтырыу комплексы урынлашасаҡ. Дөйөм белем биреү учреждениеларында урындар проблемаһын 107-се лицейҙы реконструкциялап, проект ҡеүәтен 1650 урынға еткереү аша хәл итеү планлаштырыла.

✓ **Өфө ҡала хакимиәте башлығы Глумилино биҫтәһендә Комсомол урамы, Дәүләткилдиев бульвары, Рудольф Нуриев, архитектор Рехмуков урамдары менән сикләнгән кварталдың планын яңынан эшләргә тип кире ҡайтарған.** Элек был урында РВ-1 радиостанцияһы, баҡсалар һәм гараж кооперативтары урынлашҡан булған. Әле бейек йорттар төҙөлөшө әүҙем бара. Яңы квартал халҡының ихтыяжын ҡнәғәтләндереү өсөн 600 урынлыҡ балалар баҡсаһы, Дәүләткилдиев бульварында сменаһына 500 кешене ҡабул итерлек 5 ҡатлы поликлиника төҙөү, мең ярым автомобиль һыйҙырышлы парковка эшләү күҙаллана. Йәмәғәт транспортының Рудольф Нуриев урамынан үтеүе, унда бер туҡталыш эшләнеүе планлаштырыла. Бынан тыш, Комсомол - Дәүләткилдиев бульвары - Рудольф Нуриев - архитектор Рехмуков урамдары буйлап трамвайҙың резерв һыҙаты проектланған була. Кире ҡағылған проект бер йыл эсендә ҡайтанан эшләнеп, Баш архитектураға ҡабат ҡаралыуға сығарылырға тейеш.

---

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Артыш

❖ Ашҡаҙан йәки эсәк яман шешенән (рак) 1 ҡалаҡ артыш (можжевельник) емешенә 1 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға, ваҡыты-ваҡыты менән болғатып 2 сәғәт төнәтергә. Ашарҙан 15-20 минут алда көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Артыш псориаз ауырыуынан да ярҙам итергә мөмкин. Дауаланыу өсөн 2 балғалаҡ ваҡланған артыш емешенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғансы төнәтергә һәм һөҙөргә. Шәкәр ҡушырға һәм һыу парында сироп рәүешенә ингәнсе ҡайнатырға. Дауаны көнөнә 3 тапҡыр 1-әр балғалаҡ ашарға.

### Ҡурай еләге

❖ Аллергиянан дауаланыу өсөн 1 балғалаҡ киптерелгән ҡурай еләге сәскәһенә 100 мл ҡайнар һыу ҡойорға һәм 1 сәғәт төнәтергә. Ҡулланырҙан алда һөҙөп алырға ла, көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Астманан 1 ҡалаҡ урман ҡурай еләге тамырына 250 мл һыу ҡойоп, талғын утта 10 минут бешекләп, һыуынырға ҡалдырырға. Ашаған арала көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

### Сөгөлдөр

❖ Сөгөлдөрҙө даими ашау кеше организмына бик ыңғай тәьҫир итә, хатта көслө стресс кисергән нервы системаһын тынысландыра. Был уның составында магний матдәһе булыуға бәйле. Балаларға һәм ололарға 10 көн дауамында көнөнә 3-4 тапҡыр ярты стакан сөгөлдөр һутына 1 балғалаҡ бал ҡушып эсергә кәңәш ителә.

❖ Гепатит сиренән стакандың өҫтән бер өлөшө бешмәгән сөгөлдөр һутына яртылаш һыу ҡушып, көнөнә ике тапҡыр ашағандан һуң эсергә кәрәк.

### Меңъяпраҡ

❖ Аҙ ҡанлылыҡ булғанда 100 грамм сәскәһе менән ҡуша киптерелгән үләнгә 2 литр араҡы ҡойорға, 2 аҙна төнәтергә кәрәк. 2 ҡалаҡ дауаны ярты стакан һыуға ҡушып ашарҙан алда эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Йылайыр яҫылығында һәм Уралтау армыттарында Һаҡмар йылғаһының уң яҡ ҡушылдыҡтары буйындағы тауҙар менән айырымланып ултырған ауылдарҙа ағас оҫталары ҡымыҙ һауыттарын үҙенсәлекле итеп биҙәгәндәр. Оло Әбеш ауылында күп кенә семәрле көрәгәләр һаҡланған, уларҙы бында эшләгәндәрҙер, ахыры. Тағы ла ябай һәм һырлы көрәгәләрҙе Һаҡмар йылғаһының ҡушылдығы Ҡаҫмар буйындағы ауылдарҙа етештергәндәр (Үтәгол, Юнай, Байыш һ.б. ауылдарҙа). Башҡа урындарҙа кеүек үк, көньяҡта ла ҡабарынҡы һырлау өҫтөнлөк иткән, орнамент контур менән сикләнгән һыҙатта урынлашҡан. Түңәрәктәр, өсмөйөштәр, ҡыя шаҡмаҡтар биҙәктең төп өлөштәре булған; ҡапҡастарҙа "кояшлы" һүрәттәр киң таралған.

Хәҙер көньяҡ башҡорт оҫталарының күп төрлө ижадын тулыһынса күҙ алдына килтереп булмаҫ, күрәһең: семәрле әйберҙәр аҙ һаҡланып ҡалған, уларҙы эшләүселәр билдәһеҙ. Бер нисә боронғо көрәгәгә ҡарап ҡына теүәл фекер йөрөтөргә мөмкин.

1970 йылда Хәйбулла районы Оло Әбеш ауылының мәктәп музейындағы мискәгә оҡшаш ҡымыҙ тәпәне иғтибарыбыҙҙы йәлеп итте. Унын аҫҡы ситен эсенә киң нигеҙҙәре менән бер-берећенә тоташып торған һөҙәк өсмөйөштәр теҙелгән тар һыҙат биҙәгән. Ошондай уҡ ике ҡат һыҙат өҫкө яғына ла эшләнгән, уларҙағы һүрәттәр бер-береһенә ҡарата ҡапма-ҡаршы, көҙгөләге сағылыш кеүек булған. Һауыттың ҡырҙарына ҡап уртаһын самалап ике ҡатлы ҡаймалы түңәрәктәр урынлаштырылған, уларҙың һәр береһенең үҙәгендә алты тажлы ҡабарынҡы сәскә биҙәкле түңәрәк һырланған. Ошондай уҡ сәскә йөморо сығынты-тотҡаһы өҫтөнә лә эшләнгән.



*Ҡымыҙ тәпәне, ижау һәм тоҫ һауыты. Хәйбулла районы, 1970 йыл. Рәссамы М.Д. Кузнецов*

Шул уҡ йылда беҙ Йылайыр районы Иҫке Яҡуп ауылындағы аласыҡтарҙың береһендә күргән тәпәндең ҡырҙары башҡаларҙан айырмалы рәүештә тура итеп эшләнгән, әммә аҫҡа ҡарай саҡ ҡына киңәйгән. Семәрле тотҡалары ҡуша юнылған. Өҫкө һәм аҫҡы ситтәренән бер төрлө алыҫлыҡта, яҡынса 1/3 бейеклекте тәшкил итеп, контурлы һыҙаттар менән сикләнгән ҙур ҡыя шаҡмаҡтарҙан торған биҙәк һыҙаты үткән, улар үҙ-ара бәләкәй ҡыя шаҡмаҡтар менән тоташтырылған. Ҡапҡасын тотош тиерлек көкерсәкле һәм бер нисә ҡатлы ("тештәр") түңәрәк - мөһөр (солярный) биҙәк биләгән.



*Башҡортостандың Йылайыр районы Иҫке Яҡуп ауылынан ҡымыҙ тәпәне. Экспедиция материалдарынан. Рәссамы В.М. Шутова*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ

# ЗАРЛАНМАЙЫҠ,

## зарланыу рухиәтте үлтерә, көсөбөҙҙө кәметә

**Иҡтисади тарҡалыу сигенә етеп, илебеҙ оло һынауҙарға дусар ителгән осорҙа беҙҙең үҙебеҙгә лә был көрсөктәрҙе булдырмау тураһында уйланырға кәрәк. Был санкциялар беҙҙән эшһөйәрлек, йүнселлек, тырышлыҡ талап итә. Киләсәккә өмөттө өҙмәү, барыһы ла имен-аман үтеп китеүенә ышанысты юғалтмау мөһим.**



Әйткәндәй, бындай иҡтисади көрсөктәр элек тә булған. 1920-1930 йылдарҙы ғына алайыҡ. Был осорҙа бөтә донъя аслыҡ һәм ҡытлыҡ кисергән. Йыраҡ китмәй генә 1990 йылдарҙы иҫкә төшөрөү ҙә етә. Аллаға шөкөр, имен-аман үткәреп ебәрҙек ул саҡтағы көрсөктө лә. Ул йылдарҙың һөҙөмтәһе шул: халыҡ ҙур тормош тәжрибәһе тупланы. Эш урындарының ҡәҙерен белеү, аҡса һанарға өйрәнеү, дөрөҫ тотоноу, бер кемдән бер ни көтмәҫкә, үҙ-үҙеңә генә ышанырға кәрәклеген аңлай башланы.

Социаль дәүләт тип аталһаҡ та, йәшерен-батырын түгел: ябай халыҡ өсөн социаль кәртәләр етерлек, үҙеңдән башҡа бер нигә ышаныс юҡ. Шулай булғас, беҙгә фәҡәт үҙебеҙҙең көстө, аҡылды, зиһенде үстерергә, өмөтһеҙлеккә бирелмәҫкә кәрәк. Тарихтан күреүебеҙсә, тормош бер ҡасан да еңел булмаған. Халҡым революция, Бөйөк Ватан һуғышы, дөйөм хужалыҡтар ойоштороу осорондағы мәхшәрҙе лә, аслыҡ, юғалтыуҙарҙы ла еңеп сыҡҡан.

Миҫалға ҡарт ҡайным Йәнтилин Яхъя Ярулла улының тормош юлын үрнәк итә алам. Ул 1899 йылда хәҙерге Мәләүез районы Хәсән ауылында тыуған. 1991 йылда Күмертау ҡалаһында донъя ҡуйҙы. "Ниндәй генә түңкәрелеш, юғалтыу, түҙә алмаҫлыҡ хәлгә тарыһаң да Аллаһ хикмәте, ҡөҙрәте менән шунан сығыу юлдарын табып була",- ти ине ул. Ғөмүмән, Йәнтилиндәр нәҫеле ауылда көслө рухы, эшһөйәрлеге, булдыҡлылығы менән айырылып торған. Ауылда 3 мәсет булған. Етеш тормошта йәшәргә тырышҡандар. Донья, ил сәйәсәте тегеләй әйләнеп, былай борғанып, 1930 йылдарға еткәндә хужалыҡтарында 4 ат, 7 һыйыр, ваҡ мал булған. Кеше ялламағандар, бөтә ғаилә менән үҙҙәре эшләгәндәр. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, "халыҡ дошманы", "кулак" мөһөрө тағылып, өҫтәрендәге кейем менән генә ауылдарынан ҡыуылып, һөргөнгә оҙатылғандар. "Әммә илемә үпкә һаҡламаным, - тип әйтә торғайны ул. - Ситтә тороп ҡалыу отошлораҡ булһа ла, срокты тултырғас, кире Башҡортостанға ҡайттыҡ. Тыуған ауылыма юл ябыҡ ине, шуға күрә Ишембайҙа төпләндек. Матур ғына йәшәй башлағайныҡ, кемдер тағы "халыҡ дошманы" тип, донос яҙған. Балаларҙы, йәнде һаҡлау өсөн заман сәйәсәтенә ҡулайлашырға кәрәк ине. Улым Минлеғәли комсомолға инде, 1937 йылда армияға оҙаттыҡ. Был уны һуңғы күреүебеҙ булды".

Оло ҡыҙы Мәрйәм "кулак" мөһөрөнән ҡасып, Ҡарағандаға сығып китә. Донос арҡаһында Ишембайҙан дә китергә мәжбүр була ҡайнымдар. Шулай итеп, Бабайлар таш-күмер сығарыу яткылыҡтарына эшкә киләләр. Землянка ҡаҙып, йәшәр торлаҡ төҙөп, кәзә, һыйыр үрсетеп йәшәй башлайҙар. 1953 йылда Күмертау ҡалаһынан өс бүлмәле фатир бирәләр. Фатирға күскәс, мал тотоп булмай, ә үҫеп килгән алты балаға ите лә, һөтө лә кәрәк. Шуға күрә Яхъя бабай Ырымбур яҡтарында өй һалып, мейес сығырып аҡсалата килем алып, етеш тормошта йәшәне. Бөтә ауырлыҡты эш менән үткәрҙе. Әбейе мәрхүмә булғас, 70 йәшендә янынан тормош башланы, Көйөргәҙе районы Муса ауылына өй һалып, өйләнеп, мал-тыуар аҫрап, ат алып, ейәндәрен аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеп, ҡәҙерле олатай булып йәшәне. 92 йәшендә әхирәткә күсте. "Минең өҫтөмдән донос яҙып, тыуған ауылымдан, илемдән ҡыуҙырып, яфа сиктерҙеләр, әммә барыбер Аллаһ биргән иманымды, көс-ҡеүәтемде, рухымды һындыра, эшһөйәрлегемде, һаулығымды тартып ала алманылар. Сөнки намаҙ, доға ярҙамында булдым. Улар тыйылған ваҡытта ла эстән генә йәшереп үтәнем. Хоҙай Тәғәлә ярҙам итмәһә, башҡа ярҙам итеүсе юҡ ине",- ти ине ул.

Бер уйлап ҡараһаң, әле беҙҙең йәшәү хан туйы кеүек бит ул. Утын әҙерләргә кәрәкмәй, өйҙә газ йылыта. Үлән, бесән сабыу, баҡсаға һыу һибеү еңеләйҙе. Ҡартлыҡҡа, һаулыҡҡа ҡарамай, баҡса тултырып емеш-еләк, йәшелсә, картуф, сөгөлдөр, кәбеҫтә үҫтерә алабыҙ.

Шуға ла, таҙа гендары модификацияланған сит илдең ағыулы, антибиотик менән шыплап тултырылған аҙыҡтарын ашағансы, үҙебеҙҙекен үҫтерәйек, тип мөрәжәғәт итке киләяҡташтарға. Аҙыҡ-түлектең хаҡтары ла артып тора, яҙ кәбеҫтәнең килоһы 120-150 һумға менде. Тимәк, янынан баҡсасылыҡҡа тотонорға ваҡыт етте. Беҙҙән күреп, балалар, ейәндәр ҙә эйәрер. Өҫтәүенә, дәүләт йәшелсә үҫтереп һатыусыларға ярҙам күрһәтергә лә әҙер.

Тормош иптәшем дә ҡарт олатаһы өлгөһөндә 65 йәшендә ауылға ҡайтып, өй һалды. Емеш-еләк, йәшелсә үҫтерәбеҙ. Дарыуҙар ҙа ҡыйбат бит хәҙер, ә бында - аяҡ аҫты тулы шифалы үҫемлек. Йыбанма, йый ғына. Интернетта ла бар, "Киске Өфө" гәзите лә файҙалы үләндәр тураһында яҙып тора. Тажзәхмәткә ҡаршы үләне лә етерлек. Быйыл ковидтан иптәшем нык ауырыны, сөнки ул профилактик үләндәргә ышанмай ине, хәҙер ҡыҙыҡһыныуы уянды.

Барыһы ла - үҙ ҡулыбыҙҙа. Мәҡәләмде Яхъя бабайҙың һүҙҙәре менән тамамлағым килә: "Зарланмағыҙ! Йә доға уҡығыҙ, йә эшләгеҙ. Зарланыу рухиәтте үлтерә, көстө бөтөрә. Көнләшмәгеҙ, гонаһ йыймағыҙ..."

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез районы Хәсән ауылы.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# КӨНСӨЛДӘР



**Кешелекте һәләкәткә илткән кире тойғоларҙың иң көслөһө тип әйтер инем мин көнсөллөк хисен.**

Кисә генә иң яҡын дуҫтарҙың араһына үтә алмаҫлыҡ кәртә ҡуйған, ете-яттар, беренең юлы бере менән һис киҫешмәгән кешеләр араһында нәфрәт тыуҙырған, айыҡ ақ менән аңлап та, ҡыҙыу йөрәкте, туҙған күнелде енә алмаҫлыҡ иткән тойғо ул. Күпме һәләкәткә орлоҡ һалған, күпме енәйәткә юл асҡан ҡара уй, мәкер ул.

Әйткәндәй, ир менән ҡатын араһындағы, ҡыҙ менән егет араһындағы ҡайһы бер хистәрҙе лә көнләшеү тибеҙ. Көнсөл ир, көнсөл бисә тип һүҙ һөйләнә, яҙыуға һалына. Ә беҙҙең яҡта быны "ҡыҙғаныу" тибеҙ. Анауының ире ҡыҙғансыҡ ул (ҡатыны), тиҙәр беҙҙәкеләр. Айырмаһын һиҙәһегеҙме? Ҡыҙғаныу. Сит ҡуҙҙәрҙән, сит теләктәрҙән ҡурсалау һымағыраҡ яңғырай бит, ә? Әлбиттә, яҡшы был, тип әйтергә теләмәйем. Һөҙөмтәһенә ҡарап, был да кире тойғо. Шулай ҙа...

Урыҫтарҙа "белая зависть", "черная зависть" тигән хәбәр бар. Йәнәһе лә, "аҡ көнсөллөк" алдынғы эштәргә, камиллашыуға этәргес булып тора. Риза түгелмен. Беҙҙә, башҡортта, был күренеш, был халәт сәм тип атала. Сәм - матур һәм ябай һүҙ, эскерһеҙ ынтылыш. Икенсе кешенең уңыштарынан сәмләнгән күңел тау-таштар аҡтара, дарьяларҙы кисә, Асман байҡай. Сәмләнеү сит тарафҡа зыянһыҙ.

Көнләшмәй йәшәлгән ғүмер матур үтә. Ундай кеше, ғәҙәттә, тирә-яғындағы яҡшыны, башҡаларҙағы матурлыҡты тиҙ күрә. Күрә лә ҡабул итә һала. Күрмәмешкә һалышмай. Көнләшмәй йәшәгеҙ, ғүмерегеҙ матур үтер...

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

18

# Ғаиләм-ҡәлғәм

9-15 ИЮЛЬ (майай)
2022 йыл
№27 (1017)

ӨЛКӘНДӘР ҠОЛАҒЫНА



## ЙӨРӨРГӘ, ЙӨРӨРГӘ ҺӘМ ЙӨРӨРГӘ!

**Олоғайая барған һайын беҙ сәсебеҙ ағарыуына йә ҡойолоуына, йәки тиребеҙ сырышыуына һәм һалыныуына ҡурҡырға түгел, ә аяҡтарыбыҙ хәлһеҙләнеүенән ҡурҡырға тейешбеҙ.**

Әгәр ҙә ике аҙна дауамына аяҡтарҙы ҡыбарлатмағанда, уларҙың көсө 10 йыл арауығындағы кеүек кәмейәсәк. Ғалимдар уҙғарған тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, ололар булһынмы ул, әллә йәштәрме, әгәр ҙә аяҡтар ике аҙна ҡыбырламаһа, улар 20 - 30 йыллыҡ ҡартайған һымаҡ буласаҡтар. Аяҡтарҙың мускулы хәлһеҙләнгән һайын, уларҙы тәҙәтеүгә бик күп ваҡыт кәрәк буласаҡ. Шуға күрә йәйәү йөрөү кеше организмы өсөн бик мөһим.

Кәүҙәнең бөтә ауырлығы, тимәк, йөкләнеш аяҡтарға төшә. Табандар кеше кәүҙәһен тотоп тороусы терәк, тип һанарға мөмкин.

Шуныһы ҡыҙыҡ, кешенең 50 процент һөйәктәре һәм 50 процент мускулдары нәҡ ике аяҡҡа тура килә. Кеше кәүҙәһенең иң ҙур һәм иң ныҡ беркеткестәре - быуындары ла аяҡтарҙа. "Ныҡ һөйәктәр, көслө мускулдар һәм һығылмалы быуындар кеше кәүҙәһенең ауырлығын "күтәреп йөрөтөүсе" иң кәрәкле "тимер өсмөйөш", тигәндәр. Үҙ ғүмерендә иң күп энергияны һәм хәрәкәтсәнлекте кеше нәҡ ике аяғы арҡылы башҡара.

Ә һеҙ беләһегеҙме, әгәр ҙә йәш кешенең янбашы етерлек кимәлдә көслө булһа, ул бәләкәйерәк машинаны да күтәрә алыу мөмкинлегенә эйә.

Ике аяҡ кеше тәненең нерв күҙәнәктәренең, ҡан тамырҙарының һәм улар буйлап аҡҡан ҡандың 50-шәр процентын алып тора.

Аяҡтар һау булғанда ғына ҡан йөрөшө яҡшы була, шуға күрә көслө мускуллы аяҡлы кешеләрҙең йөрәктәре лә һауһаҡ була.

Ҡартайыу аяҡтарҙан башлана. Кеше ҡартайған һайын мейенән аяҡтарға тапшырылған инструкцияның теүәллеге һәм тиҙлеге кәмей.

Йәш олоғайған һайын "һөйәктәр өсөн тәғәйенләнгән кальций ашламаһы" кәмей барып, бөтөнләй бөтөүе ололарҙың һөйәктәре йыш һыныуға килтерә. Ололарҙа һөйәктәрҙең һыныуы үлемесле, мәҫәлән, ҡан мейеһе тромбозы ауырыуҙарына килтерергә мөмкин.

Янбаш һөйәге һынған оло йәштәге кешеләрҙең 15 проценты ҡазаланғандан һуң бер йыл дауамында вафат була икәнен белә инегеҙме?

Аяҡтарға күнекмәләр эшләү бер ҡасан да һуң түгел, хатта 60 йәштән һуң да.

Көнөнә кәмендә 30 - 40 минут йәйәү йөрөгөҙ. Был аяҡтарығыҙға етерлек кимәлдә күнекмәләр алһын һәм мускулдар һау булһын өсөн кәрәк.

Әйткәндәй, Аллаһ талап иткәнсә, мәсеттәрҙә 34 тапҡыр эйелеп, 5 тапҡыр намаҙ уҡыһағыҙ, йәғни 34 тапҡыр мотлаҡ булған эйелеү һәм 26 тапҡыр өҫтәмә эйелеү менән бөгөнгө заман медицинаһы һәм фән иҫбат иткәндәрҙең барыһын да алаҫаҡһығыҙ.

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

## АҠЫЛЛЫ БУЛ, БАЛАМ!

**Һәр ата-әсә үҙ балаһының тәртипле, тыңлаусан булып үҫеүен теләй. Был тәбиғи хәл. Әммә уның кире яҡтары ла юҡ түгел. Һәр ваҡыт аҡыллы булырға тырышып тороу балала бик күп комплекстар тыуҙыра, байтаҡ кәртәләр, ҡаршылыҡтар барлыҡҡа килтерә, шул арҡала ул тормошта үҙен таба алмай йонсой. Уңға боролһа ла, һулға боролһа ла, ата-әсәйҙең "Аҡыллы бул"ы мейеһен быраулап торғанлыҡтан, нимәнелер үҙе теләгәнсә эшләүҙән, яңылышыуҙан, үҙ хатаһы арҡаһында яҡын кешеләренең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтереүҙән ҡурҡа. Ул һүҙгә тағы ла "кеше алдында ояҡҡа ҡалдырма" кеүегерәге килеп ҡушылһа, тағы ла ҡурҡыныс ыраҡ.**



Һүҙ ҙә юҡ, тыңлаусан бала тәү сиратта үҙе өсөн түгел, ә ата-әсәһенә ҡулай. Сөнки уның өсөн оялырға тура килмәйәсәк. Ул бала һәр ваҡыт тәртипле булғанға күрә, йән дә тыныс. Аҡыллы бала үҫтергән атай-әсәйҙең тәрбиә мәсьәләһе лә шау "бишле" нән торған көндәлеккә аҙна йә ай аҙағында ҡултамға ҡуйыуҙан уҙмай. Ә инде шул "биш"-тәр араһында ни сәбәптәндер бер "дүртле" килеп сыҡһа, өйҙә оло ғауға ҡуба. Нисек инде, тип асыулана атай кеше, һин мине мәсхәрәләп, дүрт алып ҡайттың? Әсәй кеше иһә, бындай хәлдән бөтөнләй һушын юя.

Ә уйлап ҡараһаң, мәктәптә гел "бишле" гә генә уҡығандар күп осраҡта һуңынан юғалып ҡала, сөнки улар тормоштоң үҙенән дә тик юғары билдәләр генә көтөп йәшәй. Ул донъяның мәктәп партаһы менән генә сикләнмәүен аңлай алмай. Бындай бала киләсәктә үҙенең хаҡлы икәнен белһә лә, ауыҙ асып һүҙ әйтә алмай, дөрөҫлөктө иҫбатлай алмай ыҙалана, ул ғүмере буйы бер урында эшләргә мәжбүр, сөнки башҡа эште "дүртле" гә йә "өслө" гә башҡарыуҙан ҡурҡа, йылдар буйы бер ерҙә тапана.

"Отличник" үҫтергән ата-әсә баланың йылына бер алған "дүртле"һе өсөн ҡайышҡа үрелә, уҡытыусыға, директорға барып етә. Баланы иһә был түбәнһетә, сөнки ул үҙен белә һәм ни өсөн "дүртле" алғанын да яҡшы аңлай. Тап шундай ата-әсәләр баламдан иҙән йыуҙырғанһығыҙ, туҙан һөрттөргәнһегеҙ, тип ғаүғалап мәктәп юлында йөрөүҙән дә тартынмай.

Әбына мәктәптә "өслө" гә уҡыған, тәртибе лә насарыраҡ булғандар киләсәктә үҙ эше менән шөғөлләнгән бизнесмендар, билдәле кешеләр булып китә. Ни эшләп шулаймы?

**Сөнки улар тормошта ла, мәктәптәге кеүек, насар билдәләр алыуҙан, шелтәләр эләктереүҙән ҡурҡмай, шуға ла әле бер, әле икенсе өлкәлә үҙен һынай, емерә, төҙәтә, ҡыҫҡаһы, яңылышыуҙар, хаталар аша үҙенә юл яра. Уны "Кеше ни әйтер?" тигән уй ҙа артыҡ борсомай, сөнки ата-әсәһе уны ирекле итеп үҫтергән һәм көндәлектәге билдәләре, аҡылы өсөн түгел, бары тик булғаны өсөн яратҡан, нисек бар, шулай ҡабул иткән. Ул тулы тормош менән йәшәй: иҙәнен дә йыуа, ҡар ҙа көрәй, эш тә боҙоп ала, ғөмүмән, һәр нәмәгә яраҡлашып үҫә.**

Улар кемдәндер шелтә алыуҙан да, эш урынын алмаштырыуҙан да, бар тапҡанын юҡҡа сығарып, яңынан күтәрелеүҙән дә ҡурҡмай, төшөнкөлөккә лә бирелеп бармай.

Ә артыҡ аҡыллы, атай-әсәй өсөн "уңайлы" балалар ни эшләргә ҡушһаң, шуны эшләй, телләшмәй, үҙ фекерен яҡлап йонсотмай. Балаң да тәртипле, йәнең дә тыныс. Ул яңылыш ҡына берәй эш боҙһа, өҫтөнә "эшкинмәгән", "башһыҙ" кеүек һүҙҙәр яуырын көтөп кенә тора. Аҙмы ни арабыҙҙа өҫтәлгә сәйен түккән өсөн генә лә балаһын сәғәттәр буйы мөйөшкә баҫтырып тотҡандар? Улар шул ваҡыт эсендә баланың психикаһына ниндәй зыян килеүен күҙ алдына ла килтермәй, сөнки үҙҙәре тураһында ғына уйларға күнеккән.

Аҡыллы бул, тимәй генә нисек бала үҫтереп булһын, тиеүселәр табылыр. Тәү сиратта, баланы тыңлай һәм ишетә белеү, фекерҙәре менән иҫәпләшеү, хыялдарын уртаҡ итеү, күңелен үҫтереү мотлаҡ. "Башың йәш әле быны белергә", "Аптыратма" тип ҡанатын киҫкәнсе, ваҡытында уның һорауҙарына яуап бирергә йә булмаһа, саҡ ҡына үҫкәс, һинең менән мотлаҡ был һорауға әйләнеп ҡайтырбыҙ, тип аңлашырға кәрәк. Баланың ҡыҙыҡһыныуҙарын, мауығыуҙарын иҫәпкә алып, артабан дөрөҫ йүнәлеш биреү, уның "икеле", "өслө" ләрен ҡабул итеп, шул рәүешле юлында осраясаҡ проблемаларҙы дөрөҫ ҡабул итергә өйрәтеү ҙә ата-әсәнең төп бурысы. Һәм иң мөһим бурыс - уны үҙеңә кәрәккәнсә итеп түгел, ә ул үҙе теләгәнсә итеп үҫтереү. Ни өсөн ул беҙ табип йәки уҡытыусы итеп күрергә теләгән өсөн генә шул һөнәрҙәрҙе һайларға тейеш? Беҙгә ултырырға ҡушһаң - ултырып, баҫырға ҡушһаң -баҫып торған балалар кәрәккәнгә генә, ауыҙ асып һүҙ әйтергә ҡурҡып торған ҡурҡаҡ, аҡылһыҙ булып күренеүҙән оялып, беҙ һыҙған тура юлдан ғына йөрөп күнеккән, аныҡ маҡсатһыҙ, ҡыйыуһыҙ кешеләр үҫергә тейеш һуң? Яңылыш ҡына насар һүҙ ысҡындырып, ауыҙына атай йоҙроғо эләктергән, шул арҡала тәрән тетрәнеү кисергән һәм тотлоғоп ҡалған баланы беләм. Ул әле булһа тормошҡа яраҡлаша алмай, үҙен таба алмай ыҙалана.

Үҙе белем алған мәктәптә әсәһе директор булып эшләгәнгә күрә генә мәктәпте алтын миҙалға тамамлап, абруйлы ойошмала етәксе булып эшләгән танышым да бар. Әммә... былар барыһы ла әсәйҙең теләге, уның ҡаҙанышы. Афарин, тип әйтер инем ул әсәйгә, балаһы өсөн тырышҡан, уға киләсәккә юл ярған, кеше араһында абруйын күтәргән, ләкин шул түрәнең тормошҡа ашмай ҡалған күпкә юғарыраҡ баласаҡ хыялдары барлығын беләм. Тик ул әле булһа тәүәккәлләүҙән, яңылышыуҙарҙан ҡурҡып, күңеле ятмаған эштә йөрөй, һәр иртә үҙен һөйрәп тигәндәй шунда алып бара. Былар барыһы ла әсәнең уны түрә итеп күргеһе килгән өсөн, кеше араһында әллә кем булып, маҡтанып йөрөр өсөн кәрәк.

Бөтмәҫ тыйыуҙар артында тормошҡа ашмай ҡалған хыялдар, шуларға бәйле аяныслы яҙмыштар ята. Бер ниндәй өгөтләүһеҙ, ата-әсә тырышлығынан башҡа ла тик "бишле" гә уҡыған, күңеле теләгән юлды һайлап, шул юлда үҙ хаталары аша уңыштар яулаған, маҡсаттарына ирешкәндәр ҙә юҡ түгел. Тик был инде бөтөнләй башҡа тема...

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

**Йәмғиәттең төплө нигеҙе - ныҡлы ғаиләләр. Нәҫ үҙе бер бәләкәй генә дәүләт ролендә булған ғаиләлә тотош йәмғиәттең киләсәге тәрбиәләнә. Ғаилә кешегә ышаныс өҫтәй, ныҡлы терәк була. Шуға күрә ныҡ, татыу, бәхетле ғаиләләрҙең, унда ата-әсәләренә арҡаланып, борсолоуҙар белмәйенсә үҫкән балаларҙың күберәк булыуы беҙҙе көслө итә. Бөгөнгө әңгәмәселәрем - Ханты-Манси автоном округының Сорғот ҡалаһында йәшәүсе Азат һәм Рәүилә ҠӘЙЕПҠОЛОВтар ғаиләһе нәҡ шундайҙарҙан. Улар менән ғаилә ҡиммәттәре, балалар тәрбиәһе тураһында һөйләштек.**

# СИТ ТАРАФТАРҘА ЛА...

## үҙлегеңде һаҡлап, үҙең булып йәшәп була!



**Һүҙҙе танышыуҙан башлайыҡ. Үҙегеҙ тураһында һөйләп, ғаилә тарихығыҙ менән таныштырып үтегеҙ әле.**

**Рәүилә:** Мин Йылайыр районы Ҡашҡар ауылы ҡыҙы, Азат Баймаҡ егете. Тыуған урындарыбыҙ әллә ни йыраҡ булмаһа ла, яҙмыш беҙҙе алыҫ Себер тарафтарында таныштырып ҡауыштырҙы.

**Азат:** Мин әрме сафынан ҡайтҡас, Сорғотҡа килеп эш башланым. Рәүилә шулай уҡ был ҡалаға эшкә юлланған булған, Сорғотта осрашып танышып, ғаилә ҡорҙоҡ. Быны 15 йылдан артыҡ ҡулға-ҡул тотоношоп, татыу ғына йәшәп ятабыҙ, Аллаға шөкөр. Ике малайыбыҙ һәм ҡыҙыбыҙ бар. Илһам менән Вадим мәктәп уҡыусылары, ҡыҙыбыҙ балалар баҡсаһына йөрөй.

**Рәүилә:** Һәр кемде яҙмышы йөрөтә, тиеүҙәре хаҡтыр. Баймаҡтан да, Йылайырҙан да әллә күпме саҡрым йыраҡта ятҡан сит ҡалала ике башҡорт осрашып, ғаилә ҡороуы үҙе үк яҙмышҡа яҙылғаны ҡушыуы түгелме ни!

**Өс бала буй еткереп килгән ғаиләлә ниндәй тәрбиә алымдары ҡулланылыуы тураһында ла ишетке килә...**

**Азат:** Әллә ниндәй сер булырлыҡ алымдар ҡулланмайбыҙ, буғай. Тәү сиратта, үҙебеҙ балаларға үрнәк булып, башҡортлоғобоҙҙо онотмайынса йәшәргә тырышабыҙ. Һәр балаға киләсәгенең төплө, уңышлы, даланлы булыуына нигеҙҙе ата-әсәһе һала бит. Бала ғаиләлә ниндәй тәрбиә күрә, ниндәй мөхиттә үҫә, шул уҡ моделде үҙ ғаиләһендә лә ҡуллана. Шуға күрә кәләш менән балаларға һәр яҡлап та лайыҡлы тормош көтөү өлгөһөн күрһәтергә тырышабыҙ.

**Рәүилә:** Беҙҙе атай-әсәйҙәребеҙ һәр осраҡта ла гәҙел, эшһөйәр булырға өйрәтте. Ғаиләләге татыулыҡтың, шул иҫәптән ир менән ҡатындың бер-береһенә, һәр кеменең туғандарына, ғөмүмән, бөтә кешегә ҡарата ла ихтирамлы булыу кәрәклеген тәрбиәнең төп нигеҙе итеп йәшәйҙәр улар һәм беҙгә лә бәләкәйҙән ошо ҡағиҙәләрҙе һеңдереп үҫтерҙеләр. Хәҙер беҙ балаларға ошо уҡ сифаттарҙы һалырға, донъя йөгөн тартҡанда тәрлә саҡтар булыуын һәм бер ваҡытта ла кешелеклекте юғалтырға ярамағанлығын аңлатабыҙ.

**Азат:** Иманлы булһындар тип тәрбиәләйбеҙ, бергәләп мәсеткә йөрөйбөҙ, аҙан ҡысҡыртып, аяттар уҡытып торабыҙ. Иманлы бала - әҙәпле бала. Күңелендә иман булғандың йөрәгендә боҙоҡлоҡҡа урын булмай. Ундай кеше ата-әсәһен хөрмәт итеп, яҡындарын ситләтмәй, ярҙамсыл һәм хәстәрлекле булып үҫмер итә. Беҙ ҙә балаларыбыҙҙың изгелекле, игелекле булыуҙарын теләйбеҙ һәм һәр һүҙебеҙ һәм эшләгән эшебеҙ менән ошо орлоҡтоң ныҡлап тамырланыуына булышлыҡ итергә тырышабыҙ.

**Башҡортостандан ситтә осрашып, милли мөхиттән алыҫ булған ерҙә башҡорт ғаиләһе булып, рухлы балалар үҫтереүегеҙ маҡтауға лайыҡ. Ғаиләгеҙ менән Сорғотта үткәрелгән милли байрамдарҙа әүҙем ҡатнашаһығыҙ, балаларығыҙ шартлатып башҡортса һөйләшә. Ошо миллилекте, үҙбулмышлығыҙҙы һаҡлап ҡалыу ауырлыҡтар тыуҙырмаймы?**

**Рәүилә:** Үҙебеҙ ситтә йәшәһәк тә, күнелебеҙ һәм йөрәгебеҙ һәр саҡ тыуған төйәгебеҙҙә инде ул. Был һәр ситтә йәшәүсе милләттәшебеҙҙең булмышындалыр, тип уйлайым. Шуға күрә башҡорт йыр-моңонан, йолаларынан айырылмайбыҙ, миллилегебеҙҙе һаҡлайбыҙ.

Мин үҙем Сорғотта оҙаҡ йылдар уңышлы эшләп килгән "Шатлыҡ" халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән ныҡлы бәйләнеш тотам. Тәүҙә ансамблдең концерттарында алып барыусы булдым, хәҙер үҙем дә бейейем. Оло улыбыҙ Илһам да бик теләп шөғөлләнә ансамблдә. Художество етәксебеҙ Байегетов Рияз Нияз улы бик талапсан да, үҙ эшенә яуаплы ҡараған, башҡорт телен һәм мәҙәниәтен яҡшы белгән кеше. Үҙе лә янып йөрөй, ансамбль, тип, беҙҙәге осҡонға ла ҡуҙ өҫтәп, дәрләтеп кенә тора. Уның ҡулы аҫтында шөғөлләнеүебеҙ беҙҙең күңелдәрҙе үҫтерә, саф башҡортса аралашып, йыр-моң тыңлап, күңел булғансы бейеп ҡайтһаҡ, күңелгә шул тиклем рәхәт булып ҡала.

Ансамбль менән төрлө конкурстарҙа йыш сығыш яһайбыҙ, сараларҙа әүҙем ҡатнашабыҙ. Өфөгә барып, "Байыҡ" бейеү конкурсында призлы урын яулап ҡайттыҡ. Ошондай матур конкурсты ойоштороусыларға ҙур рәхмәт һүҙҙәребеҙҙе еткерәбеҙ.

**Азат:** Ҡайһы бер милләттәштәремдән "Башҡортлоҡто һаҡлап ҡалыу өсөн мотлаҡ шул мөхиттә йәшәргә кәрәк", тигән фекер ишетәм. Ләкин быны менән ризалаша алмайым. Һәр нәмә кешенең үҙенән торалыр, тип уйлайым. Әллә күпме йылдар башҡа милләттәр араһында йәшәп тә үҙенең телен, йолаларын онотмаған, бөтә тәне-йәне менән башҡорт булып ҡалған күпме милләттәшебеҙ бар, шөкөр. Тимәк, был мәсьәләлә тик мөхит кенә өҫтөнлөклө роль уйнамай, барыһы ла нәҡ үҙебеҙҙән тора. Шуға күрә, башҡорт булып ҡалыу өсөн мөхит түгел, ә үҙебеҙ яуаплы.

**Рәүилә:** Үҙебеҙ генә түгел, иң мөһиме, балаларыбыҙ ҙа үҙ милләтен онотмаһын, тип тырышабыҙ. Балалар менән өйҙә тик башҡортса аралашабыҙ, башҡорт телендә сыҡҡан гәзит-журналдарҙы яҙҙырабыҙ. Киләсәктә барыбыҙ ҙа ла матур милли кейемдәр тектереп алырға хыяллана-быҙ. Өҫтәлдән милли ашамлыҡтар, ашһыу өҙмәйем. Милли биҙәүестәр эшләргә яратам. Ҡыҙым да, бәләкәй булһа ла, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән мин эшләгәндә ҡарап ултыра, үҙе лә эшләп ҡарай. Ошондай, тәү ҡарашҡа, бәләкәй генә, әммә мөһим әйберҙәрҙән, эштәрҙән ҙур аҙымдар башлана. Киләсәктә балаларыбыҙ беҙҙең генә түгел, ә тотош милләтебеҙ ғорурланырлыҡ кешеләр булып буй еткерер, тип ышанабыҙ.

**Азат:** Телгә килгәндә, эштә көнө буйы урыҫса аралашаһың. Өйгә ҡайтып ингәс, Рәүилә башҡортса һүҙ ҡушып ебәрһә, күңелгә шундай рәхәт булып ҡала. Йәйгеһен ауылға ҡайтҡанда ла тик башҡорт мөхитендә булыу, үҙ телеңдә аралашыу, башҡортса йырҙар тыңлау - барыһы ла ялдың онотолмаҫ ваҡыттары. Әлбиттә, башҡортса йырҙарҙы Сорғотта ла тыңлайбыҙ, ләкин сит яҡтарҙа ул моң башҡаса, ә башҡорт мөхитендә бөтөнләй икенсе төрлө яңғыраған кеүек.

**Бәхетле, ныҡлы ғаиләнең сере нимәлә, тип уйлайһығыҙ?**

**Рәүилә:** Минеңсә, иң мөһиме, бер-береңде ишетә һәм тыңлай белеү. Күп низағтарҙың ҙур ыҙғыштарға әйләнеп китеүенә ир менән ҡатындың бер-береһен тыңлай белмәүендәлер, тип уйлайым.

**Азат:** Рәүиләнең әйткәненә тулыландырып, бәхетле ғаиләнең тағы бер сере бөтә мәсьәләләр буйынса ла уртаҡ тел таба белеүҙә, тип әйткем килә. Әгәр ниндәйҙер һорауҙы сисеү өсөн эшлекле әңгәмә ҡорорға теләмәһәң, уртаҡ бер фекергә килеү әмәлен тапмаһаң, ул мәсьәлә ҡуйырғандан-ҡуйыра барып, бөтөнләй бәйҙән ысҡынып китеүе бар.

**Ике-өс һүҙ менән генә "ғаилә" тигәнгә аңлатма бирегеҙ әле.**

**Азат:** Ғаиләм - минең өсөн ныҡлы ҡәлғәм, ышаныслы утрауым, ныҡлы терәгем.

**Рәүилә:** Ғаиләм - йәшәүемдең йәме, тормошом мәғәнәһе.

**"Өлгөлө башҡорт ғаиләһе - 2022" асыҡ республика конкурсында ҡатнашыуығыҙ ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы?**

**Рәүилә:** Был конкурста беҙ Сорғот ҡалаһында уңышлы эшләп килгән Башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәк етәкселәре Диләә Буләкова һәм Гөлсирә Әбдрәшитова саҡырыуы буйынса ҡатнаштыҡ. Бергә әҙерләнеүҙә, бер проект өҫтөндә эшләүҙе талап иткән һәр бер конкурс ғаиләне тағы ла нығыраҡ берләштерә. Шуға күрә ошондай мәртәбәле конкурста ҡатнашыуыбыҙ һәм "Ғаилә ҡиммәттәре" номинацияһында еңеү яулауыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Артабан да ошондай матур саралар ойошторолоп торһон, башҡорт ғаиләләре күберәк ҡатнашһын, тигән теләктә ҡалам.

**Азат:** Минең өсөн тулҡынландырғыс конкурс булды, сөнки беренсегә бындай сарала ҡатнаштым. Төрлө төбәктә йәшәгән башҡорт ғаиләләренең матур итеп балалар тәрбиәләүҙәрен күреү, рухлы ғаилә усағы ҡабыҙып, уны һүндермәйенсә гөрләтеп йәшәүҙәрен күреп ҡыуандым. Һәр бер башҡорт ғаиләһенә имен тормош теләп ҡалам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Класташым Рәүилә һәр саҡ йылмайып ҡына йөрөнө, шаян, тырыш һәм бар яҡлап та уңған булды Сибай интернат-гимназияһында бергә белем алған саҡта. Уның ошо сифаттарын эшлекле, ярҙамсыл, абруйлы атай һәм ир була белгән Азат тулыландырып тора. Һәр ғаилә үҙенсә бәхетле, ләкин уларҙың барыһының да уртаҡ бер һыҙаты - бер-береһенә булған хөрмәт һәм мөхәббәт. Рәүилә һәм Азат Ҡәйепҡоловтар ғаиләһе нәҡ ошондай мөхиттә йәшәй һәм бәхетле ғүмер кисерә.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ИЖАД - ҒАИЛӘ



**Ижад һөйгән йәргә бәрәбәр. Башта ул үҙенә ғашиҡ иттерә, тәмен татып, ләззәт тойғоһо кисерһәң, был кинәнес ғүмергә килгән кеүек тойола. Һөйгән йәрен осратмағандар, мөхәббәт тойғоһон кисермәгәндәр ҙа бар - әле һүҙ улар тураһында түгел.**

Ижад эше, иһә, һөйгән йәрең менән ғаилә ҡороп, балалар үҫтереүгә тиң. Бөтә ғаиләләр ҙә бер иш булмағандай, ижад менән ҡауышып айырылышҡандар ҙа, айырылып, яңынан ҡауышҡандар ҙа бар, ни ҡауышмай, йә ташлаша алмай интеккәндәр ҙә етерлек. Шулай булмай һуң, таныш булмаған тойғоға өйрәнергә, күнергә кәрәк бит! Уның шарттарын, хатта талаптарын да, тыныс ҡабул итеү мотлаҡ икән дә баһа! Төрлө низағтар килеп сыҡҡанда, ғаиләлә лә, ижадта ла үҙеңде лайыҡлы тоторға кәрәк бит әле. Сабыр төбө - һары алтын, ижадтың һөҙөмтәһе булһа, энә менән ҡоҙоҡ ҡаҙыу, бәлки, ижадтың асылылыр ҙа...

Ижад эшенең енел түгеллеген аңлағандар, уға тоғролоҡ һаҡларға кәрәклеген белгәндәр "балалар-әҫәрҙәр" тыуҙыра, уҡыусылары хөкөмөнә сығара, һөйгән йәренә хеҙмәт итә. Ижад мауығыуҙан мөхәббәткә, аҙаҡ дуҫлыҡҡа әйләнә. Кинәнес тыуҙырыусы ауыр эш тоғролоҡарҙы һәм эшһөйәрҙәрҙе ярата - ғаилә ныҡлығы ла шул сифаттарҙан ғибәрәт түгелме ни?

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# АҠСА ИҢ МӨҺИМЕ ТҮГЕЛ,

## әммә... аҡсаһыҙ ҙа йәшәп булмай



### Аҡса янсығын өйҙә "онотоғоҙ"

Әле бала һөйләшә лә белмәгән сағынан уҡ үҙе яратҡан тәмле туңдырма, кәнфитсәтләүектәр ҡайҙа һатылғанын яҡшы белә. Һәр әсә, бигерәк тә өләсәйҙәр, балаһының һораған тәм-томон, уйынсығын һатып алырға күнегеп китә. Кемдең балаһын ҡыуандырғыһы килмәһен инде!

Бәлки, сабыйығыҙҙың холҡо быңдай иғтибарҙан боҙолоп та китмәҫ, шулай ҙа ул "нимә һорайым, шуны минә алалар" тигән уйҙы бәләкәй саҡтан аңына һеңдереп үҫәсәк. Әлбиттә, был теләктәр бала ҙурайған һайын үҙгәреп торасаҡ. Иң мөһиме - теләгән нәмәһен шунда уҡ һатып алып, балағыҙҙы хыяллана һәм шатлана белеү тойғоһонан мәхрүм итәсәкһегеҙ.

Тиҙҙән балағыҙ өйҙә ҡунаҡ булғанда йәки телевизорҙа мауыҡтырғыс фильм барғанда ни өсөн ул йоҡларға тейешлеген дә аңламай башлаясаҡ. Китабынан айырып, уны магазинға икмәккә лә еҙәрә алмаясаҡһығыҙ. Ҡасан булһа ла балағыҙҙың үҙ мәнфәғәттәренән бер нисек тә баш тартырға йыйынмауын аңлаясаҡһығыҙ.

Ләкин былар киләсәктә буласаҡ. Әлегә балағыҙ матур ҡаплы шоколад һатып алмағаныҡыҙ өсөн магазин уртаһында аҡырып илаймы? Бындай саҡта нимә эшләргә һуң? Был хәлдән сығыу юлы бер генә: урамға сыҡҡанда аҡса янсығын өйҙә "онотоп" ҡалдырыу. Шулай ғына сабыйығыҙҙы был насар ғәҙәтенән арындыра алаcаҡһығыҙ. Әлбиттә, ял көнө паркка барғанда балағыҙға байрам яһап алырға ла ярай, тик көн һайын түгел.

### Ғаиләлә кем аҡса һанай?

Ун алты йәшлек ҡыҙығыҙ бер көн килеп һеҙгә "Минең туфлийым 500 һум тора, ә һин үҙеңә ике меңлек аяҡ кейеме алаһың", тип үпкәһен белдерһә, "Мин кемде үҫтергәнмен!" тип, өмөтһеҙләккә бирелергә ашыҡмағыҙ. Балағыҙ атаәсәһенең тотонған аҡсаһын һанай башлаған икән, уйланырға урын бар. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле: бәлки, һеҙ үҙегеҙ өйҙә бөтә алынған әйберҙәрҙең хаҡы тураһында йыш һөйләйһегеҙҙер? Ә бәлки, олатай-өләсәйҙәр "Күпме тора? Иҫең китер!" тип йыш ҡабатлайҙыр. Ҡыҙығыҙға ата-әсәнең сығымы уны бер нисек тә ҡыҙыҡһындырырға тейеш түгеллеген иплап кенә аңлатыу кәрәк буласаҡ.

Әлбиттә, бындай аңлашыуҙарҙан һуң бер аҙ ваҡытҡа балағыҙға нимә булһа ла һатып алыуҙан тыйылып торогоҙ. Һеҙгә ҡыҙығыҙҙың һүҙҙәре оҡшаманы, быны ул яҡшы белеп торһон. Был осраҡта "Минә бит эшкә йөрөргә, шуға ла яҡшыраҡ һәм ҡиммәтләрәк кейенергә тейешмен", тип аҡланып маташыу ҙа насар эҙемтәләргә килтерәсәк.

### Бала үҙе аҡса эшләп ҡараһын

Реклама роликтары һәм телевизорҙа барған шоуҙар үҫмерҙең аңын томалай. Унда күрһәтелгән матур тормошҡа ул шул тиклем ышана, үҙе лә шулай йәшәргә хыяллана башлай.

Рекламаларҙан баланы бер нисек тә һаҡлап булмай. Хатта өйөгөҙҙә телевизорығыҙ боҙоҡ булһа ла, ул был фетиштарҙы ҡайҙан булһа ла ишетәсәк. Уны ярлыҡтар, лейблдар, фирма билдәләре тулыһынса арбай.

**Бәктиһәң, сәстәрҙе фирмалы шампунь менән йыуырға кәрәк, кеҫәңдәге телефондың ҡиммәтле, төрлө функцияларға эйә булырға тейеш, ялдарыңды Мысыр һәм Европала үткәреү дөрөҫ икән. Былай дауам итһә, элек йәй көндәрендә ауылға ҡайтып, олатай-өләсәй янында ял итергә яратҡан балаларығыҙ тиҙҙән һеҙҙең иҫке алтынсы моделдәге машинағыҙға ултырырға ла ояла башлар. Балағыҙҙы ғаиләһенең йәшәү кимәле түбән булыуы ла сығырынан сығарасаҡ. Йәйләп ҡына "тормошта бер нәмәгә лә өлгәшә алмаған" ата-әсәгә ихтирам кәмей башлай.**

Мәктәпте тамамлауға бындай "матур тормошта йәшәү өсөн генә тыуған" балаларҙың башында елдәр уйнауы, институтҡа йәки колледжға уҡырға инеү өсөн белеме етмәүгә асыҡлана ла инде. Шул саҡта тағы ла ата-әсәгә һуңғы аҡсаларын балаларына репетитор яллау өсөн тотонорға тура килә. Күптәр шулай эшләй ҙә. Әммә бынан үҙегеҙ генә яфаланасаҡһығыҙ. Бала түләп юғары белем алыуҙы шымартылған юлдан "икенсе, яҡшыраҡ" тормошҡа илтеүсе һуҡмаҡ итеп күрә. Уларҙың был иллюзияларын ваҡытында юҡҡа сығарырға кәрәк.

Балағыҙға джинсы һатып алырлыҡ булһа ла аҡса эшләп ҡарарға мөмкинлек бирегеҙ. Ата-әсәһенең "ябай" уҡытыусы, табип, инженер булып эшләүенән оялаһы? Шулай булғас, әйҙә, һеҙгә нисек йәшәргә кәрәклеген ул үҙе өйрәтһен. Тик эшенә ҡыҫылмағыҙ, ярҙам да итмәгеҙ, барыһын да үҙе атҡарып сыҡһын.

### Комплекстарыңдан арын

Үрҙә килтерелгән миҫалдар бөтә ғаиләлә лә осрайҙыр, моғайын. Тик бер нәмәгә иғтибар итергә кәрәк: ҡайһы бер ғаиләләрҙә балалар ата-әсәләренең аҙ ғына эш хаҡы алып эшләүенән бер ҙә оялмай, нимәләр таптырып та аптыратмай, киреһенсә, үҫеп етеп, үҙҙәре уларға ярҙам итә башлаясаҡтары тураһында хыяллана.

Бер ғаиләлә үҫеп килеүсе ике бала ла төрлө булыуы бар. Улығыҙ булғанына ла риза, ә ҡыҙығыҙ аҙым һайын илап, "Яңы телефон алмаһағыҙ, алгебранан "икеле"не төҙәтмәйем", тип янай. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң?

Тәбиғәттән бирелгән характер үҙенсәлектәре алдында беҙ көсһөҙ. Тупаҫ кеше тупаҫ булып ҡаласаҡ, шулай ҙа уны был насар ғәҙәтенән арындырырға мөмкин, үҙен генә ҡайғыртыусыны башҡалар тураһында ла уйларға өйрәтеп була. Нисек тиһегеҙме? Бының өсөн үҙегеҙгә үҙгәрергә кәрәк. Әгәр ҙә өйҙә гел атаһының "Эштә ҡәҙеремде белмәйҙәр", тип зарланыуын ишетһә, әсәй кеше иренә уның аҙ аҡса эшләүен, күршеләренең инде өсөнсө машина алыштырыуын көн һайын иҫенә төшөрөп торһа, бала бәләкәйҙән уҡ ғаиләләге финанс хәлде башҡаларҙыҡы менән сағыштырып анализларға өйрәнеп китә.

Шулай булғас, комплекстарығыҙҙан арынырға кәрәк. Һәр ваҡыт аҡса турында ғына һөйләүҙән тыйылып торогоҙ. Аҡса тормошта иң мөһиме түгел икәнлеген яҡшы беләһегеҙ бит. Шулай уҡ бөтә ғәйепте рекламаға, заманға япһарып ҡуймағыҙ. Тәрбиә ғаиләлә башлана, һеҙ ниндәй - балаларығыҙ ҙа шундай, быны бер ваҡытта ла онотмағыҙ.

Рәмилә СӘЙЕТҒӘЛИНА әҙерләне.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

## ҮПКӘСЕЛДӘРГӘ КӘҢӘШ

Бер ваҡыт Бәйғәмбәрҙән:

- Кешеләрҙең иң яҡшыһы кем? - тип һорағандар. Бәйғәмбәр:

- Дөрөҫ була белгән һәр кем һәм "мәхмүм" йөрәкле кеше, - тип әйткән. Сәхәбәләр тағы:

- Беҙ дөрөҫ була белеү тураһында беләбеҙ, ә бына "мәхмүм" нимә була? - тип һораған. Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһи вә сәлләм шулай тип яуап биргән:

- Был Раббыһынан ҡурҡҡан таҙа йөрәк. Ундай йөрәктә гонаһ, яуызлыҡ, кұралмаусанлыҡ һәм көнләшеү эҙҙәре юҡ!

Бәйғәмбәр йыш ҡына шундай доға уҡыған: "Эй, Аллаһым минең! Мине хәҡиҡәт юлына баҫтыр, минең телмәремдә хаҡ ит һәм минең күңелемдән хәйләкәрлекте һәм үс алыу тойғоһон алып ташла!"

Аллаһ илсеһе мосолмандарға үсегеүҙе һәм бер-береһенән көнләшеүҙе тыйған. Шулай ҙа кешенең йөрәгендә насар уйҙар тыуған икән, Бәйғәмбәр йөрәктән күралмаусанлыҡты юйып ташлау өсөн бүләктәр бирешергә ҡушҡан. Ул:

- Бүләктәр бирешегеҙ, сөнки бүләктәр йөрәктән күралмаусылыҡты юйып ташлай, - тип әйткән.

Ул тағы ла шундай аҡыл еткергән: "Бүләктәр менән алмашығыҙ, сөнки был йөрәктән күралмаусанлыҡты һәм дошманлыҡты юя. Бер ҡатын да күршеһенең бүләген, хатта ул ҙур булмаған ит киҫәге булһа ла, әһәмиәтһеҙ тип һанамаһын"; "Арағыҙҙа ҡәрҙәшлек ептәре ныҡыһын өсөн бер-берегеҙгә бүләктәр бирешегеҙ"; "Аллаһы Тәғәлә ҡулдарына мәрхәмәтле. Кешеләрҙең тормошон еңеләйтергә уйлаусылар менән Аллаһ ҡәнәғәт. Ә кем ауырайтырға теләй, Аллаһ уларҙың булған бөтә яҡшы нәмәһен ала һәм еңеләйтеүселәргә бирә".

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА



# ҺЕҘ ФАТИХАЛЫ КЕШЕ...

**Ер шарында йәшәгән кеше һаны 7,8 млрд тәшкил итә. Күпселек өсөн был бик ҙур һан булып тойола ғына, әммә ошо 7,8 миллиардты 100 процент итеп алһаң, күп нәмә аңлашыла төшә.**

*100 процент халыҡтың:*

- 11 проценты Европала йәшәһә, Төньяҡ Америкала - 5, Көньяҡ Америкала - 9, Африкала - 15, Азияла 60 проценты йәшәй.
- 49 процент - ауылда, 51-е ҡалала көн күрә.
- Ҡытайса 12 процент кеше һөйләшһә, испан һәм инглиз телдәрендә - 5-әр процент, ғәрәп, һинд, бенгал, португал телдәрендә - 3-әр процент, рус һәм япон телдәрендә 2-шәр процент кеше аралаша. 62 процент кеше үҙенең туған телендә һөйләшә.
- 77 процент кешенең торлағы булһа, 23 процент кешенең йәшәр урыны юҡ.
- 21 процент кеше артыҡ күп ашаһа, 62 процент - күпме теләй, шунса; ә 15 процент кеше аслы-туҡлы көн итә. 48 процент кеше тормошонаң тәүлек хаҡы 2 АҠШ долларынан да кәмерәк.
- 87 процент кеше таҙа эсәр һыу ҡуллана, 13 проценттың бындай мөмкинлеге юҡ, йә улар бысраҡ һыу сығанағынан файҙаланырға мәжбүр.
- 75 процент кешенең кеҫә телефоны булһа, 25 проценттыҡы - юҡ. 30 процент кеше интеренет менән файҙаланһа, 70 процент кешенең бындай мөмкинлеге юҡ.
- 7 процент кеше юғары белемгә эйә, 93 процент кешегә колледжда ла, вузда ла уҡыу бәхете теймәгән. 83 процент уҡый-яҙа белһә, 17 процент кеше наҙан.
- Христиандар - 33 процент, мосолмандар - 22, индустар - 14, буддистар - 7 процент тәшкил итһә, башҡа төрлө динлеләр һаны 12 процент, дингә ышанмаусылар - 12 процент.
- 26 процент кеше 14 йылдан да кәм йәшәһә, 66 проценты 15 -64 йәштә вафат булғандар, 65 йәштән өлкән кешеләр һаны 8 процент тәшкил итә.
- Әгәр һеҙҙең йәшәр йортоғоҙ бар һәм һеҙ сифатлы аҙыҡ менән туҡланаһығыҙ, таҙа һыу эсәһегеҙ, өҫтәүенә, телефонығыҙ ҙа бар һәм интернет киңлектәрендә "сәфәр" ҡылаһығыҙ, шул уҡ ваҡытта колледж йә юғары уҡыу йорто тамамлаған икәнһегеҙ - һеҙ бәләкәй генә, ләкин өҫтөнлөклө төркөм вәкиләһегеҙ (ундайҙар ни бары 7 процент тәшкил итә).
- Донъялағы 100 процент кешенең ни бары 8 проценты ғына 65 йәшкә етә ала.
- Әгәр һеҙгә 65 йәш икән, ҡәнәғәт һәм рәхмәтле булығыҙ, тормош ҡәҙерен белегеҙ, мөмкинлектән файҙаланып ҡалығыҙ. 65 йәшкә лә етмәйенсә, был донъя менән хушлашҡан 92 процент кешенән айырмалы, һеҙ әле йәшәйһегеҙ. Бының менән һеҙ фатихалы кеше, тимәк. Һаулығығыҙҙы һаҡлағыҙ, ҡалған ғүмерҙең һәр мәленең ҡәҙерен белегеҙ!

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!



# ҠУЛ ЭШТӘРЕНӘ ТОТОНОУ...

## ҡатын-ҡыҙ асылын уята

**Бөгөн магазинда бар нәмә лә бар. Әммә бөтә донъяла ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡул эштәре менән шөғөлләнә башлауы күҙәтелә. Һәм был осраҡлы түгел. Гүзәл зат үҙенең тормоштағы төп тәғәйенләнешен аңлай башланы кеүек.**

Билдәле булыуынса, яратҡан ҡул эше ҡандағы гормон кимәлен үҙгәртә. Көслө зат эшмәкәрлеге менән шөғөлләнгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың холҡо тупаҫлана, физик яҡтан да үҙгәрә башлай. Хатта етәкселек иткәндә лә уның тәнендәге еңеллеге юғала, хәрәкәте киҫкен һәм тиҙгә әйләнә.

Ә бәйләгән, теккән, сиккән, ижад иткән ваҡытта улар үҙенең ҡатын-ҡыҙ тәбиғәте менән гармонияға инә. Һөҙөмтәлә уның гормональ системаһы яҡшыра. Ҡул менән ваҡ эш башҡарыу организмдағы гормональ фонды әүҙемләштерә.

Шулай уҡ ҡул эше психика өсөн дә бик файҙалы. Бер үк хәрәкәтте ҡабатлау кешене тынысландыра. Йөрәк ритмын үҙгәртә, мускулдағы һәм нервылар системаһындағы көсөргәнеште бөтөрә. Ул тотош организмға медитация кеүек йоғонто яһай. Көнделәге хәүеф тойғоһо юғала, төшөнкө уйҙарҙан ҡотолорға булышлыҡ итә.

Ҡул эше ҡатын-ҡыҙға көндәлек мәшәҡәттәрҙән, ығы-зығынан туҡтап торорға ярҙам итә. Теккәндә, сиккәндә, бәйләгәндә беҙҙең тәнебеҙ, аңыбыҙ барыһы ла һәйбәт, тыныс, бер ҡайҙа ла ашыҡырға кәрәкмәгәнлеген аңлай. Шулай уҡ беҙҙең ер, күк, тәбиғәт менән бәйләнештә булыуыбыҙҙы, ошо асылыбыҙҙа саҡта ҡулдарыбыҙ матурлыҡ тыуҙырыуын аңларға булышлыҡ итә.

Ҡул эше - тыныс шөғөл. Береһе менән ярышмайһың, көрәшмәйһең, анализламайһың. Ул ҡатын-ҡыҙҙың күңел торошон көйләй, тормошто нисек бар, шулай ҡабул итергә ярҙам итә. Яратырға, булғанын ҡәҙерләргә өйрәтә. Бәхеттең гел генә сағыу ваҡиға һәм фейерверк түгеллеген, ә йыш ҡына тыныслыҡ һәм күңел һиллеге икәнлеген аңларға булышлыҡ итә.

Ҡул эше менән булғанда мейеңең уң яғы әүҙемләшә, һөҙөмтәлә ижади һәләт үҫешә. Төҫтә, материалды, фактураны тура килтерергә өйрәнәһең. Ғөмүмән, яратҡан ҡул эше булыуы бик мөһим. Әгәр быға тиклем бындай шөғөлгә илтифат итмәгән булһағыҙ, тотонорға бер ҡасан да һуң түгел.

ӘЙ, ЯҘМЫШ!

# МИЛӘҮШӘЛӘР БАШҠА СӘСКӘ АТМАҪ ИНДЕ...

**Беҙҙең илдә лә ғаиләлә көс ҡулланыуға юл ҡуймау һәм әсәлекте, балалыҡты, ғаиләне яҡлау маҡсатында төрлө закондар ғәмәлгә ашырыла. Әммә былар ғына ғаилә именлеген тәьмин итәме? Юҡ, әлбиттә. Быларҙың бөтәһе лә шартлыса. Ғаиләлә көс ҡулланыуға юл ҡуймауҙа, ҡанундарҙан бигерәк, тәү сиратта кешеләрҙең бер-береһенә иғтибарлы мөнәсәбәте, эргә-тирәләгеләрҙең битараф, ғәмһеҙ булмауы һәм, һис шикһеҙ, көс ҡулланыу ҡорбаны булғандарға үҙ хоҡуғын яҡлап көрәшеүе ҙур роль уйнай.**



Үҙ хоҡуғын яҡлап, яуыз иренә ҡаршы көрәшһә, түбәндәге Миләүшә исемле матур ҡатындың да ғүмере үкенесле булмаҫ ине, бәлки. Был ваҡиға тураһында күрше ҡалаларҙың береһенә ҡунаҡҡа барғанда ишеткәйнем. Татыулығы, етеш йәшәүе менән бөтәһен дә һоҡландырып, хатта көнләштереп йәшәгән ғаиләлә булған хәлгә тәүҙә бер кем дә ышанмай. Ғәжәпләнерлек тә шул: һәр ваҡыт ҡултыҡлап, йә булмаһа, етәкләп кенә йөрөткән ҡатынын ире сираттағы вахтанан ҡайтҡан төндә үлтергән һәм үҙенә лә ҡул һалған!..

Ике студент ҡыҙын үкһеҙ етем ҡалдырып, бер төндә әсәй ҙә, атай ҙа яҡты донъя менән хушлашҡан. Татыу ғаиләнең күрше-тирәһе башта был ирле-ҡатынлы бандиттар ҡулынан һәләк булғандыр, тип уйлай. Әммә тикшереү шунда уҡ ирҙең тәүҙә ҡатынын, шунан үҙен үлтереүен асыҡлай. Баҡһаң, ир ғүмер буйы ҡатынын көнләшкән. Шуның арҡаһында Миләүшәнең эшкә лә сығармаған. Тәү ҡарамаҡҡа, ҡатын эргә-тирәһендәгеләргә, ысынлап та, бик бәхетле булып күренгән. Тик тәҙрә төптәре гөл-сәскәгә күмелгән был йортта оҙаҡ йылдар ҡатындың туҡмалып йәшәүе тураһында күршеләре түгел, хатта үҙ ҡыҙҙары ла белмәй тиерлек. Себерҙән эштән ҡайтҡан көндө үк ир йөраты: "Кемде индерҙең, кемгә барҙың, кем килде?" - тип һорау алып, ғазаплап, үсен ҡандырған да, ҡалған көндәрҙә яҡшы ир "битлеге"н кейеп үткәргән.

Үҫеп килгән ҡыҙҙары шикләнә башлағас, әсәләре төрлөсә аҡлана, әммә атайҙарының йәләт икәнлеген әйтмәй. Иренең язалауҙары уның ҡайтҡан көнөндә, йәғни бер көн генә булыуына нисек тә түҙгән. Икенсе көнөнә тубыҡланып, ғәфү үтенәсәген, ҡатынына яңы төр миләүшә сәскәһен алып ҡайтасағын күҙ алдына килтереп, алдан уҡ ғәфү итә. Ә миләүшәгөлдәрҙе ул ысынлап та ярата. Әллә нимә һымаҡ күрә ул шуларҙы. Иseme өсөн генә түгел, ә ире менән араһын яҡынайтыусы, дуҫлаштырыусы, бәйләүсе итеп ҡарай уға. Быны ҡатын, әлбиттә,үҙе уйлап сығара. Үҙе уйлап сығара ла, мөкиббән китеп ышана. Улай ғына ла түгел, хатта табына. Балалар үҫкәс, был холҡо бөтәр, тип өмөтләнә тәүҙә. Ҙурайған ҡыҙҙары алдында шулай ҡыланмаҫ, оялыр, ҡурҡыр инде тип уйлай. Бер-бер артлы мәктәпте тамамлап, балалары баш ҡалаға уҡырға киткәс, иренең ҡанһыҙлығы тағы ла арта.

Ҡатын был язалауҙарға шул тиклем өйрәнеп бөтә, хатта төнө буйы аяҡ-ҡулы бәйләнеп ятыуҙары, ваннала, туалетта бикләнеп ултырыуҙары уға бер ни тормай. Бер генә көн бит, бер генә көн, тип үҙен тынысландыра. Шулай ҙа һуңғы ваҡытта әсәһенең, туғандарының һораулы ҡарашын күтәрә алмай башлай ҡатын. Даими баш ауыртыуҙары, төндәрен йоҡлай алмауы, һаташып сығыуҙары ла үҙгәнә үтә. Көндәрҙән бер көндө, ҡыҙҙар ғына уҡып бөтһән, айырыласаҡмын, тигән тиген ҡәтғи ҡарарға килә.

...Бөгөн ире сираттағы вахтанан ҡайтасаҡ. Уның ыҙалауҙарына элеккесә алдан әҙерләнә башланы Миләүшә. Ауыртыныуға түҙемлерәк булһын өсөн анальгетик ҡапты, йөрәк ярһыуынан төнәтмә эсте лә, бер тәҙрәнән икенсеһенә йөрөп көтә башланы. Шунда ғына иғтибар итте: тәҙрә төбөндә яңы гөл һауытына урын ҡалмаған. Фиалкаларҙың ниндәй генә сорты юҡ унда: алһыу, күк, зәңгәр, шәмәхә төҫөндәгеләр. Һәр береһе унар-ун бишәр хатта. Улар араһында коллекция өсөн үҫтерелгәндәре лә, сәнәғәт гөлдәре лә бар. Бөтәһе лә матур итеп, ҡуйы сәскә атҡан. Тик ни ғиллә? Ҡайһы арала ҡатындың иң яратҡан аҡ төҫтәге "Көләш гөлләмәһе" тип аталған сортлыһы һулыған! Миләүшә, бер ҡасан да булмағанса, ҡалтырарға тотондо. Иренең сираттағы язалауҙарынан ҡурҡып түгел, ә тиҙҙән ошо тәҙрә төбөндәге фиалкаларҙың бөтәһе лә һулыясағын күҙ алдына килтереп. Шунда уҡ ошо торошон бәхетһеҙлеккә юраны. Ысынлап та, юраһаны юш килә Миләүшәнең. Ошо төндә уны ире быуып үлтерә...

Миләүшә-гөл яратҡандар - үтә нәҙек хисле, хыялға бирелеүсән, юғары фекер йөрөткән, тоғро, ниндәй генә булһа ла, насармы-яҡшымы, үткән тормошон идеаллаштырған, тыныс һәм йомшаҡ күңелле кешеләр, тиҙәр. Егерме йылға тиклем язалауҙарға дусар булған ҡатын ниндәй хыялдар ҡорҙо икән? Хәҙер был хаҡта бер кем дә белмәҫ тә инде...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ҺАЙ, МАҺИРҘАР!

# ОҪТАЛАРҘЫҢ ОҪТАҺЫ УЛ!



**Ауылымдың уңған ҡатын-ҡыҙҙарының береһе Гөлниса Абдуллина тураһында булыр был яҙмам.**

Гөлниса Баязит ҡыҙы - 5 бала әсәһе. 2004 йылда "Әсәлек даны" миҙалы менән бүләкләнә. Ул - оҫта ҡуллы, ярҙамсыл, уңған хужабикә. Быуа 10 йылдан ашыу ауылымда "Алсәскә" түңәрәген алып бара. Бер төркөм ҡатын-ҡыҙҙарҙы бәйләргә, тегергә, сигергә, сәйлән теҙергә өйрәтте. Әлеге көндә ҡашмау биҙәү менән шөғөлләнәләр. Уның ҡул эштәре һабантуйҙарҙы, һәр төрлө сараларҙы, күргәҙмәләрҙе биҙәй, бик күп маҡтау ҡағыҙҙары һәм рәхмәт һүҙҙәре - эшенең һөҙөмтәһе булып тора. Өйөнә барып инһәң, үҙенде әкиәт иленә барып ингән кеүек хис итәһең. Күҙҙең яуын алырлыҡ түшәктәр, яҫтыҡтар, ултырғыс, диван ябыуҙары, һәр төрлө биҙәк ҡулланып эшләнгән пледтар, түшелдеректәр, ҡашмауҙар, косынкалар һ.б.

Гөлниса Баязит ҡыҙын оҫталарҙың оҫтаһы тип әйтергә лә мөмкин. Тормош иптәше Таһир ағай ҙа балта оҫтаһы. Ул шулай уҡ столяр, сварщик, токарь һөнәрҙәрен үҙләштергән. Хәҙер икеһе лә пенсияла, 2 ейәнен һәм 1 ейәнсәрен үҫтерешергә ярҙам итәләр.

Заман һынауҙарына бирешмәй, ауылда баҡса үҫтереп, ҡош-ҡорт үрсетеп, мал көтөп йәшәгән замандаштар менән һоҡланмай мөмкин түгел. Шундайҙарҙың береһе булып тора Абдуллиндар ғаиләһе.

**Зәкиә ӘБҮБӘКЕРОВА,**
**Ишмөхәмәт ауыл хакимиәте депутаты.**
**Баймаҡ районы.**

**✓ Камиланың да ҡаушауы үткәндәй булды, ул башын ҡалҡытты. Шул мәлдә тәҙрә яғынан кемдеңдер үткер ҡарашын тойҙо, башын борҙо һәм... шишмә буйында осратҡан үсмерҙе күрҙе. Ҡараштар осрашты...**






–Һин! Ғәзинур, һин нисек бында ул?

- Камила, һинең өсөн ҡайттым...

- Минең өсөн? Минең өсөн... Аҙ ғына алдараҡ ҡайта алмай инеңме ни, минең өсөн булғас? Аҙ ғына!

- Әле һуң түгел. Мин беләм, әле һуң түгел!

- Нишләп улай оҙаҡ булды юлың? Һине... Һине генә көткәндә белә инең бит.

- Хаталарҙы төҙәтергә әле һуң түгел...

- Нисек һуң түгел?.. Хәйер, һинең иң ҙур хатаң һуңлауҙа түгел. Беләһеңме нимәлә? Самаһыҙ икеләнеүеңдә. Ҡурҡаҡлығыңда иң ҙур хатаң. Яратҡан кеше барлығын, көтөүен белдең. Тик һинең иҫәбеңдә ул һәр саҡ артҡараҡ күсә килде.

- Беҙ аңлашырбыҙ... Һин мине аңлаясаҡһың, һин һәр саҡ мине аңланың.

- Дөрөҫ. Шулай ҙа мин һине, ә һин мине аңлауға нисәмә йылдар үтеп китте. Мәктәптән үк. Мин аңланым... Ләкин һин мине бер ҡасан да аңламаның, буғай. Юҡ. Ә мин һинең аңларыңды көтөп йәшәнем. Институттан һуң ете йыл...

- Мөхәббәт өсөн һуңлау бармы ни?

- Кисәге көнөм тик һиңә бағышланғайны, бөгөнгөһө - икенсенеке. Инде үҙең уйла.

- Уйлайһы юҡ. Ҡайттым бит!..

- Ә иртәгә... минең туйым башлана.

* * *

Камила һигеҙҙе тамамлаған йылды атаһын Юлбирҙе ауылына мәктәп директоры итеп тәғәйенләнеләр. Был ауылға улар йәй күсенде. Үҙе ялан ҡыҙы булғанға, тау-урманлы тәбиғәт Камилаға иҫ киткес тәьҫир итте. Өйҙәр ҙә бит әле урман эсендә тиерлек урынлашҡан. Улар йәшәйәсәк йорт ауыл ситендәрәк. Эргәлә генә мәктәп. Кәртә осона сыҡтыңмы, көмөш һыулы шишмә сылтырап ята. Башта һыуға шишмәгә йөрөргә тура килде, һыуынан ғына атаһы өй эргәһенә ҡоҙоҡ ҡаҙытты. Шуныһы ҡыҙыҡ: Камила күсеп килгән ыңғайы ағаслыҡ араһынан ағып сыҡҡан шул шишмәгә барырға ҡурҡа торғайны. Эй, урман күреп үсмәгәс ни... Берике аҙнанан ҡыҙыҡай яңы тормошҡа күнегеп китте. Хатта ки үҙен ошо тәбиғәттең бер өлөшө итеп тоя башланы. Серле тәбиғәт торған һайын үҙенә нығыраҡ ылыҡтыра барҙы. Иртәнән кискә тиклем төрлө ҡоштар һайрауы, күҙҙең яуын алған сәскәләр - бөтәһе лә әкиәт донъяһын хәтерләткәндәй. Ә ул, Зөһрә ҡыҙ һымаҡ, көйәнтәһен яурынына элеп ала ла бормалы һуҡмаҡ буйлап шишмәгә китә. Күнәктәге һыуҙы сайпылтмай өйгә алып ҡайта белергә лә кәрәк бит әле. Эй, шулайтырға тырыша торғайны Камила. Хатта атаһы ишек алдына ҡоҙоҡ ҡаҙытҡас та һирәкләп булһа ла шишмәнән һыу алып ҡайта торғайны. Ысынлап та инеш юлы серле булды. Бәлки, шуға ла Камиланың күңеле һәр саҡ бормалы һуҡмаҡҡа тартылғандыр?

...Шишмәгә барып етергә бер нисә аҙым ғына ҡалғас, уның ҡаршыһына һороло-ҡаралы ялбыр йөнлө бер эт килеп сыҡты. Улай ғына ла түгел, хатта алдына килеп ултырҙы. Ҡыҙҙың бер күнәге, көйәнтәнән ысҡынып, үләнгә барып төштө. Камила ҡурҡышынан ҡатты ла ҡалды. Этте ашатлап үтеп булмай ҙа баһа, ләкин кире боролоуы ла ҡурҡыныс, арттан эләктереп алмаҫмы?

- Ялбыр, кил бында!

Көтөлмәгән был көслө тауыштан Камила һиҫкәнде. Эт ҡойроғон болғай-болғай тауыш килгән яҡҡа ыңғайланы. Уғаса булмай, ағаслыҡтар араһынан күкһел футболка кейгән бер үсмер килеп сыҡты. Ул да ят ҡыҙҙы күргәс, аптырап китте шикелле, һынамсыл ҡарашып торҙолар. Беренсе булып үсмер һәрәкәткә килде. Үлән араһында ятҡан күнәккә үрелде. Йәһәт кенә алып Камилаға һуҙҙы. Күҙҙәр осрашты. Ҡыҙ, ниңәлер, был ҡараштан унайһыҙланып, йөҙөн ситкә борҙо. Үсмер ҙә ситкә атланы. Шулай ҙа ҡыҙыҡһыныуын еңә алмайынса, этенең башынан һыйпай-һыйпай йәнә лә ҡарап алды. Камила ла боролоп күҙ һалды. Шул саҡ үсмер йөҙөндә сәйер үҙгәреш сағылды. Магнит һымаҡ үҙенә тартып торған төпһөҙ күҙҙәр... Камила ниндәйҙер аңлайышһыҙ тойғо кисерҙе.

- Ялбыр, әйҙә! Һин ҡурҡма, ул кешегә теймәй.

Камила яуап итеп аҙ ғына йылмайғандай итте. Шунан өҙөлгән юлын дауам итте. Үсмер һаман этенең башынан һыйпаған килеш уның артынан ҡарап ҡалды. Нисек кенә сәйер булмаһын, был ҡарашты Камила арҡаһы менән дә тойҙо.

Кире ҡайтҡанда һуҡмаҡта берәү ҙә юҡ ине инде. Күңелгә моңһоу булып китте. Ышанырға теләмәгәндәй, тирә-яғына күҙ һалды. Матур тәбиғәт бушлыҡ менән солғап алынды. Ошо осрашыуҙы ҡыҙ ниңәлер байтаҡ ваҡыт иҫенән сығара алмай йөрөнө.

Һиҙҙермәй генә көҙ килеп етте. Яңы уҡыу йылын Камила төрлө тойғолар кисерешендә көтөп алды. Ят синыфҡа барып инеү бик үк рәхәт булмаҫ, сөнки Юлбирҙелә әле белгән кешеһе юҡ. Мәктәптә нисек ҡабул итерҙәр? Өйрәнә алырмы икенсе мөхиткә? Һәр беренеһенең үҙ дуҫы, ҡатнашҡан кешеһе барҙыр. Уға бында бөтәһен дә өр-яңынан башларға тура киләсәк бит. Еңел түгел... Шуға оҡшаш уйҙар борсоно күңелде. Бер яҡтан, ҡыҙыҡ та - әллә кемдәр менән танышаһы, әллә нимәләрҙе асаһы, өйрәнәһе барҙыр...

Ят мәктәп, ят синыф менән осрашҡан тәүге көн мәңге хәтерҙә уйылып ҡалды. Камила килеп инеү менән бөтәһе лә шымып ҡалды. Ҡыҙыҡһынған, сәйерһенгән ҡараштар... Ҡыҙ иҫәнләште лә, берәүгә лә күҙ һалмайынса, аҫҡа ҡараған килеш буш партаға барып ултырҙы. Бер аҙҙан уҡыусыларҙың иғтибары кәмене. Улар яңынан шаулаша, геүләшә башланылар. Камиланың да ҡаушауы үткәндәй булды, ул башын ҡалҡытты. Шул мәлдә тәҙрә яғынан кемдеңдер үткер ҡарашын тойҙо, башын борҙо һәм... шишмә буйында осратҡан үсмерҙе күрҙе. Ҡараштар осрашты, Камила ҡулына тотҡан ручкаһын нығыраҡ ҡыҫты.

Уны күргәс, үсмерҙең күҙе яҡтырып, осҡонланып киткәндәй булды. Был яҡтылыҡ ҡыҙҙың күҙенә лә күсмәнеме икән? Шулай булмаһа, донъя яҡтырып китмәҫ ине бит. Көтмәгәндә, уйламағанда.

Дәрес барғанда Камила үҙе лә һиҙмәйенсә, йәнә шул яҡҡа ҡарап алды. Тап шул мәлдә үсмер ҙә уның яғына боролдо. Күңел ниндәйҙер бер ҡыуаныс кисерҙе. Бәлки, үҙенең тәүге танышын бер синыфта тап иткәне өсөндөр? Шул арала исемен дә белде. "Ғәзинур" тип йыш өндәшәләр. Уҡытыусылар ҙа дәрес һайын тиерлек мөрәжәғәт итә, бик актив малай. Синыфташтарының уға хөрмәт менән ҡарағанын беренсе көндә үк тойҙо ҡыҙ.

Камилаға иһә, ысынлап та, яңы мөхиткә инеүе еңел булманы. Бигерәк тә Айгөл исемле ҡыҙ уны ҡабул итмәне. Айгөл - синыф старостаһы, бик әүҙем, кеше менән аралашыусан, бойорорға ла ярата, яҡшы уҡый. Камиланы үҙенә әллә көндәш булыр тип ҡурҡтымы икән? Һәр хәлдә, улар араһында аңлашылмаусанлыҡ тәүге аҙнала уҡ тойолдо. Химия дәресе башланыр алдынан синыфҡа Айгөл килеп инде.

- Дежурныйға лабораториянан әйберҙәр килтерергә! - тине бер кемгә лә ҡарамайынса.

Камила үҙен дежур итеп тәғәйенләгәндәрен белмәй ине әле. Тыныс ҡына ултыра бирҙе. Бер нисә минуттан ҡып-ҡыҙыл булып химия уҡытыусыһы килеп инде.

- Һеҙ нимә, мине бала-сағаға итеп күрәһегеҙме? Ҡайҙа дежур итеүсе?-тип ҡысҡырҙы.

Айгөл тороп баҫты ла тәкәббер ҡарашын Камилаға төбәне.

- Уға әйтелде. Ә бына ни өсөн һуҙыла, быныһын белмәйем!

- Кем ул?

Камиланың йөрәге жыу итеп китте. Хәҙер уҡытыусы уға екерәсәк. Ул нимәләр тип аҡланырға тейеш, ҡыҫҡаһы, хурлыҡҡа ҡаласаҡ... Урынынан ҡалҡына башлаған ҡыҙға ҡарап, Айгөл шулай тине:

- Аңламаһалар...

Тик һүҙен тамамларға өлгөрмәне, Ғәзинур урынынан һикереп торҙо.

- Ғәфү итегеҙ. Мин... Мин хәҙер...

Уҡытыусыға ла һүҙ әйтергә лә ирек бирмәй, йүгереп сыҡты ла китте. Камиланың иңенән тау төштөмө ни! Унайһыҙ хәлдән ҡотҡарҙы ла баһа Ғәзинур! Дәрес барышында Айгөл уға әллә нисә мәртәбә яман итеп ҡарап алды. Ләкин Камила артыҡ әһәмиәт бирмәне. Асыуы булһа, үтер, Камила уның менән дә, бүтәндәр менән дә дошманлашырға йыйынмай.

* * *

Бер нисә көндән синыфтары менән ҡырға ҡарағай ултыртырға киттеләр. Егеттәргә бырау һымаҡ ниндәйҙер ҡорамал тараттылар. Ҡыҙҙар иһә, улар ҡаҙған ергә ҡарағай үҫентеләре ултыртып барырға тейеш.

- Йә, башлайбыҙмы? - Айгөл Ғәзинур яғына боролдо.

- Илфат, ярҙам ит Айгөлгә, - шулай тине лә Ғәзинур Камилаға табан атланы. - Әйҙә, беренсе булып тамамлағың киләме?

Камила йылмайып баш ҡаҡты. Башҡалар ығы-зығы килгән мәлдә улар тигеҙ рәт буйлап төштө лә киттеләр. Ҡаршы яҡҡа иң тәүгеләрҙән булып барып сыҡтылар.

- Ҡара, беҙ ысынлап та беренсе булып бөттөк тә баһа...

- Беҙ һәр саҡ беренсе буласаҡбыҙ!

Ғәзинурҙың тыныс, көр тауышы Камила йөрәгендә ғорурлыҡ тойғоһо уятты. Эргәлә көс-көсүәтә ташып торған, үҙенә ышанған кеше булыуы ҡалай һәйбәт! Ысынлап та, синыфтарында Ғәзинурға еткән берәү ҙә юҡ. Ул иң көслөһө, иң аҡыллыһы, иң тәрбиәлеһе, иң тәүәккәле, һәм Ғәзинур фәҡәт Камилаға ғына әйтә был һүҙҙәрҙе: "Беҙ һәр саҡ беренсе буласаҡбыҙ". Ҡояштай балҡыған Ғәзинур ҡарашын тирә-яҡтан, йәғни һаман эштәрен теүәлләй алмаған синыфташтарынан алманы. Тегеләрҙе дәртләндерҙе. Унан ҡыҙға табан боролдо, эштәренән ҡәнәғәт икәнен белдереп, тамаҡ ҡырҙы.

- Бына шулай ул!

Ғәзинурҙың әйткән ышаныслы һүҙҙәре уларҙың ныҡлап дуҫлашып китеүенә сәбәп булманымы икән? Теүәл фәндәрҙе яҡшы белеүе, Камилаға һәр саҡ ярҙам итеүе йоғонто яһамай ҡалмағандыр. Ғәзинур сослоғо, тәүәккәллеге менән, бәлки, Камиланы үҙенә йәлеп иткәндер? Ҡыҙ ниндәй хәлгә тарыһа ла, Ғәзинурҙың ярҙамға килерен йөрәге менән тойҙо. Ошо дуҫлыҡ һуңынан мөхәббәт булып бөрөләндә. Дөрөҫ, уларҙың дуҫлығына ҡамасауларға маташҡандар ҙа булманы түгел.

Алгебранан контроль эш барған мәлдә уҡытыусы ҡайҙалыр сығып китте. Балалар ҙа шул арала урындарынан тороп, геү килешеп алды. Камила дуҫ ҡыҙы янына барып әйләнде. Килһә, дәфтәре урынында юҡ. Башта, берәйһе шаярҡандыр, тип уйланы, һорап ҡараны, берәү ҙә белмәй. Инде нишләргә? Шул саҡ эргәһенә Ғәзинур килеп баҫты: "Күсер!" Ҡыҙ унайһыҙланып баш тартты. "Тиҙ бул!" - үсмерҙең тауышы бойороусан яңғыраны. Ҡыҙға буйһоноуҙан башҡа сара ҡалманы. Иң ғәжәбе: Камиланың дәфтәрен иртәгәһен сүп кәрзиненән табып бирҙеләр. Быны кем, ни өсөн эшләгән - сер булып ҡалды. Дөрөҫ, Ғәзинурға үҙенән: "Директор ҡыҙының ялсыһы", -тип көлгән ике малай менән һуғышырға тура килгән. Был хәлдә һуңынан Ғәзинурҙың дуҫы Илфат һөйләне. Синыфташтары араһында Ғәзинурҙың Камилаға мөкиббән киткәнен, ҡыҙҙың да уға мөнәсәбәте яҡшы икәнен белә, аңлай, килешә инеләр. Хәйер... Эйе, Айгөл килешә алманы. Камила ҡыҙҙарҙан уның 8-се синыфта уҡығанда уҡ Ғәзинурға записка яҙғанын ишеткәйне. Хәҙер ни өсөн Айгөлдөң күҙ уғы менән атырҙай булып йөрөгәнен яҡшы аңлай. Әлдә Камиланың башына ундай уйҙар инеп тә сыҡманы. Кемгәләр записка-фәләҫ яҙыуҙан Алла һаҡлаһын. Ундай ғәмәлдең фәтүәһен, мәғәнәһен аңламай Камила. Бер нәмәгә шикләнмәй: Айгөлгә ҡарағанда ул даланлы. Бына шуға ла үҙенә ҡаршы эшләгән ваҡлыҡтарына иғтибар итмәҫкә, тәртмә һүҙҙәрен ишетмәҫкә тырышты. Ә көсөргәнешлелек сығарылыш йылында ла дауам итте.

**(Дауамы бар).**

*✓ Бюджет урынына үтә алмайынса, профилле ойошма менән килешеү төҙөп, түләүле бүлеккә уҡырға инһә, БР Ауыл хужалығы министрлығы был ойошмаға ошо студент өсөн түләнгән сумманың 90 процентҡа тиклемен кире ҡайтара ала.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ДҮРТЕНСЕ КӨНӨ..

■ Органик йәшелсәләрҙә насар химик матдәләр булмауын беләбеҙ. Хәҙер ғалимдар ябай ысул менән үҫтерелгән йәшелсәләргә ҡарағанда уларҙың тәбиғи антиоксиданттарға байыраҡ икәнлеген асыҡлаған. Барселона университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, органик томаттарҙан яһалған һут һәм кетчупта полифенолдар күберәк. Полифенол - антиоксидант матдәләре, йәшелсәләрҙең тышҡы тәьҫирҙән тәбиғи һаҡланыу ысулы. Һуңғы осорҙа күп тикшеренеүҙәр антиоксиданттарҙың ҡартайыу процесын тиҙләтеүсе иректе радикалдарҙы зарарһыҙландырыу һәләтен асыҡлағайны инде. Күп кенә киң билдәле биологик әүҙем өҫтәмәләр тап полифенол нигеҙендә яһала. Әммә ғалимдар капсула йәки таблеткаға ҡарағанда, тәбиғи ризыҡтар кеше организмы өсөн файҙалыраҡ, тип раҫлай.

■ Ковентри (АҠШ) университеты ғалимдары кофеиндың тағы бер файҙалы яғын асыҡлаған. Самаһын белеп ҡулланғанда, ул мускулдарҙы һығылмалы һәм көслөрәк итә. Әммә шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк, кофеин тәьҫиренә "йәш" мускулдар бирешеп бармай, шуға ла уны үҫеүсе организмға тәғәйенләү урынһыҙ. Оло йәштәге кеше өсөн иртәнге бер сынаяҡ ҡәһүә хәрәкәтте алыштырмаһа ла, мускулды тонуста тотоу өсөн яҡшы сара, ти ғалимдар. Мускулдарҙы нығытыу өсөн шпинат ҡулланырға ла була. Каролинский институты (Стокгольм, Швеция) ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр буйынса, шпинатта нитрат бар. Ә нитрат аҙ күләмдә организм өсөн файҙалы, сөнки ул кальций алышыныуы менән бәйле ике типтағы аҡһым бүленеүен яҡшырта. Был аҡһымдар күберәк булған һайын, кальций күберәк сыға, ул үҙ сиратында мускулдарҙың тартылыуын көсәйтә.

■ Торт һәм башҡа тәм-том яратаһығыҙ, әммә уларҙы ашауҙы сикләйһегеҙме? Тель-Авив (Израиль) университеты ғалимдары билдәләүенсә, әгәр ҙә татлы ризыҡты иртән ашаһағыҙ, хатта ябығырға ла була. Уларҙың теорияһына ярашлы, юғары калориялы иртәнге аштан һуң көн дауамында тәмтомға тартылыу булмаясаҡ. Етмәһә, иртән матдәләр алмашыныу процестары яҡшы эшләй, иртәнге аш ваҡытында уларҙы "ҡыҙҙырып" ебәрһәң, көнө буйы ҡабул ителгән ризыҡ яҡшыраҡ янасаҡ.

■ Ябай тоҙға ҡарағанда, таш һәм диңгеҙ тоҙо файҙалыраҡ һанала. Әммә Salt and Health компанияһы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, тоҙҙоң был төрҙәренең химик составында айырма бөтөнләй юҡ. Волфсан превентив медицина институты табиптары фекеренсә, кулинарҙарҙың таш йәки диңгеҙ тоҙонда мөһим минераль матдәләр күберәк тигәне дөрөҫлөккә тап килмәй. Табиптар шулай уҡ бөгөн кешеләрҙең тоҙҙо кәрәгенән артыҡ ҡулланыуы тураһында ла белдерә. Тоҙҙоң көндәлек нормаһы - 1 балғалаҡ, әгәр ул ошо билдәнән ашып китһә, ҡан баҫымы күтәрелеү, инсульт ҡурҡынысы янай.

■ Кесаҙна - ололар өсөн дә, балаларға ла аҙнаның иң ауыр көнө иҫәпләнә. Шуға ла был көндө уларға артыҡ ауыр эш йөкмәтергә ярамай. Был турала Роспотребнадзор етәксеһе Геннадий Онищенко белдерә. Шуға ла мәктәп расписаниеһын төҙөгәндә был үҙенсәлек мотлаҡ иҫәпкә алынырға тейеш. Ул шулай уҡыусылар беренсе, иртәнге сменала уҡырға тейешлеген дә ата-әсәләрҙең хәтеренә төшөрә.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# АУЫЛДАРҘЫ ЙӘШӘТЕҮСЕЛӘР...

## ошо уҡыу йортонда әҙерләнә инде



**Мәктәпте тамамлағанда һәр сығарылыш синыфы уҡыусыһы һайлау алдында тора: атайға бер һөнәр оҡшай, әсәйгә - икенсе, уҡытыусылар үҙ юлдарын дауам иткәнде теләй... Һәм ошо ваҡытта кемгәлер оҡшаған түгел, ә тап күңелең теләгән һөнәрҙе нисек һайларға? Рәсәй Федерацияһының юғары уҡыу йорттары араһында Башҡортостан вуздары ла алдынғы урындар биләй. Шуларҙың береһе - "Лидер аграр ВУЗ" исеменә эйә Башҡорт дәүләт аграр университеты. Милли рейтинг һөҙөмтәләре буйынса ул 2019 йылда "Милли танылыу" рейтингында 4-се урын яулаһа, белем биреү сифаты буйынса Рәсәйҙең 200 иң яҡшы вузы иҫәбенә инә. Уҡыу йорто абитуриенттарға ниндәй мөмкинлектәр тәҡдим итә, ҙур дәғүәселек заманында улар ни өсөн тап ошо уҡыу йортона өҫтөнлөк бирергә тейеш - ошо хаҡта БДАУ-ҙың ҡабул итеү комиссияһының яуаплы сәркәтибе Рәмил ЗАРИПОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**➔ Заман башҡа - заң башҡа, тиҙәр, уҡыу йорттары ла заман менән бергә атлай һәм уның талаптарына яраҡлаша. Буласаҡ студенттарға ниндәй яңылыҡтар һәм өҫтөнлөктәр тәҡдим итәһегеҙ?**

- Университетта дүрт кимәлле: бакалавриат, специалитет, магистратура, аспирантура юғары белем биреү программаһы тормошҡа ашырыла. Былтырғы уҡыу йылынан башлап, урта махсус һөнәри белем биреү буйынса ла студенттар ҡабул итә башланыҡ, йәғни колледж белеме бирәбеҙ. Яңы һөнәр - энергетика буйынса белгестәр әҙерләйбеҙ.

Абитуриенттар (инвалидтарҙан башҡа) уҡыу йортона ингәндә, әлбиттә, БДИ һөҙөмтәләре буйынса ҡабул ителә. Инвалидтар БДИ тапшырған булып та, әгәр уның һөҙөмтәләре ҡәнәғәтләндермәһә, юғары уҡыу йортона ингәндә вуз имтиханын тапшыра ала. Колледждан һуң ингәндәр вузда профиль имтихандары бирә.

Уҡыу йортона инеү өсөн, эйе, өс предметтан Берҙәм дәүләт имтиханы талап ителә. Рус теле һәм математика мотлаҡ предмет булһа, өсөнсө предметты уҡыусы тәҡдим ителгән 5 предметтан үҙе һайлай. Башҡа вуздарҙа ла һайлау мөмкинлеге бар, әммә уларҙа күбеһенсә өсөнсө имтихан итеп ике генә предмет: химия йәки физика тәҡдим ителә. Ә беҙҙә һайлау мөмкинлеге ҙур, хатта төҙөүсе специальносына мотлаҡ ике имтихандан тыш, мәҫәлән, сит тел йәки информатика буйынса БДИ һөҙөмтәләре йәки вуз имтиханы тапшырып инеп китергә була.

Икенсе яңылыҡ - быйылдан башлап бюджетҡа ла, коммерция бүлегенә лә, көндөҙгө-ситтән тороп уҡыу бүлектәренә лә документтарҙы "Госуслуги" аша тапшырырға мөмкин. Бынан тыш, почта хеҙмәте (Рәсәй почтаһы һәм курьер хеҙмәттәре) аша ла документ тапшырырға була. Шулай уҡ һәр вуз үҙенең системаһы аша документ ҡабул итә ала, беҙҙә ул мобиль ҡушымта. Теләһә ниндәй гаджетҡа "Мобильное приложение БашГАУ" мобиль ҡушымтаһын яҙҙырып, документтарҙы шуның аша ебәрергә мөмкин. Был ҡушымтаны беҙ үҙебеҙ эшләнек һәм ул быйыл беренсе тапҡыр ҡулланыла. Теләүселәр инде документтарын шәхсән килеп тә тапшыра ала. Шуны иҫкәртеп китеү урынлы: электрон почта аша ебәрелгән документтар ҡабул ителмәй.

Беҙҙә тағы шундай программа бар: коммерция бүлегенә уҡырға инеүселәр өсөн ойошма түләргә мөмкин. Мәҫәлән, ниндәйҙер районнан кемдер бюджет урынына үтә алмайынса, профилле ойошма менән килешеү төҙөп, түләүле бүлеккә уҡырға инһә, белем алған йылдар өсөн түләүҙе ойошма ҡаплай, әммә БР Ауыл хужалығы министрлығы был ойошмаға ошо студент өсөн түләнгән сумманың 90 процентҡа тиклемен кире ҡайтара ала. Бында бер генә талап бар - түләү индергән ойошма ауыл ерендә теркәлгән һәм ауыл хужалығы продукцияһын етештереү ойошмаһы булырға тейеш.

Шуны ла әйтеп китеү кәрәк: беҙҙең университетта 60 процент специальность - профилле, 40 проценты башҡа һөнәрҙәр, мәҫәлән, энергетик, төҙөлөш тармағы белгесе һ.б. Һәм коммерция бүлегенә уҡырға инеүселәр ошо профиль булмаған һөнәрҙе һайлап та, ойошма уларҙың сығымдарын түләһә, министрлыҡ барыбер ҙә ойошмаға 90 процентҡа тиклем сығымды кире ҡайтара. Һөҙөмтәлә студент бушлай уҡый булып килеп сыға.

**➔ Элек, мәҫәлән, студенттар өсөн ойошма түләһә, улар мотлаҡ ошо ойошмала нисәлер йыл эшләргә тейеш ине. Хәҙер ҙә шундай талап бармы? Әгәр кемдер уҡып бөткәс, ойошмаға ҡайтырға теләмәһә...**

- Был программа буйынса улар ошо ойошманың хеҙмәткәре булып һаналырға тейеш, йәғни улар үҙҙәренең хеҙмәткәрҙәре өсөн түләй. Әгәр студент менән ойошма араһында төҙөлгән килешеүҙә уҡып бөткәндән һуң күпмелер эшләү (отработка) тураһында пункт бар икән, әлбиттә, улар ошо йылдарҙы эшләргә йәки уҡыу өсөн тотонолған сығымдарҙы ҡапларға тейеш була.

Бынан тыш, маҡсатлы ҡабул итеүҙәр ҙә бар. Әммә ул бюджет нигеҙендә уҡырға инеүселәргә ҡағыла. Ундағы килешеүҙә уҡыу тамамланғандан һуң мотлаҡ өс йыл эшләү яҙылған.

**➔ Берҙәм дәүләт имтихандарын уҡыусылар төрлөсә тапшыра, хатта тапшыра алмаған осраҡтар ҙа бар. Ә бына иң ҙур балға, йәғни 100 балға тапшырыусыларҙы нисек ылыҡтыраһығыҙ, сөнки ундайҙар бит Мәскәү, Питер кеүек ҡалаларҙы һайларға тырыша...**

- Әгәр абитуриенттың БДИ буйынса дөйөм балы 190-дан алып 209-ға тиклем булһа, улар беренсе семестрҙа ай һайын 11 мең һум стипендия ала. Дөйөм балл 209-ҙан юғарыраҡ булһа, беренсе семестрҙа 16,5 мең стипендия ҡаралған. Балдар суммаһы 230-ҙан күберәк булһа, уларға бер тапҡыр 50 мең һум дәртләндереү түләүе бирелә һәм беренсе йыл ятаҡта йәшәү бушлай була. Әгәр ниндәйҙер предметты 100 балға тапшырған абитуриент уҡырға инһә, уларға бер тапҡыр 100 мең һум дәртләндереү түләүе бирелә. Шулай уҡ юғары академик стипендия тигән төшөнсә бар, унда төрлө дәртләндереү түләүҙәре ҡаралған. Мәҫәлән, спортсылар, үҙешмәкәрлектә шөғөлләнеүселәр, фән юлын һайлаусылар. Уларға юғары академик стипендия түләнә.

**➔ Беренсе семестрҙа стипендия БДИ йәки вуз имтихандары һөҙөмтәһе буйынса түләнһә, семестрҙы япҡанда, мәҫәлән, студент өслө алды икән ти. Ундайҙар артабан стипендиянан ҡолаҡ ҡағамы?**

- Әгәр студент 4-5-кә өлгәшә алмай икән, тимәк, ул стипендиянан мәхрүм ҡала, әммә матди ярҙам тигән айырым статья бар. Улар ошо матди ярҙамды алырға хоҡуҡлы. Шулай уҡ айырым категорияларға социаль стипендия ҡаралған. Бынан тыш, университет үҙ средстволары иҫәбенән исемле стипендиялар түләй ала. Әүҙем студенттарға, хатта өслөләре булһа ла, төрлө сараларҙа, ярыштарҙа вуз данын яҡлап сығыш яһайҙар икән, исемле стипендия түләнеүе ихтимал.

**➔ Абитуриенттарҙы, моғайын, бюджет урындары ла ҡыҙыҡһындырыр. Ошо хаҡта ла һөйләп китһәгеҙ...**

- 2022-2023 уҡыу йылына 1350 бюджет урыны бар. Быға бакалавриат, специалитет, магистратура, аспирантура ла инә. Бер специальносҡа бюджет урындары 25-тән алып 103-кә тиклем диапазонда тирбәлә. Бөгөнгә иң ҙур бюджет урындары ветеринарияға бирелгән. Шунан төҙөлөш специальносы, артабан ландшафт архитектураһы килә.

Яңылыҡтарҙан: барлыҡ бюджет урындарының 10 проценты айырым квота (инвалидтар, етем балалар, хәрби хәрәкәттәр ветерандары), 10 проценты - маҡсатлы квота (ойошма-предприятиелар тарафынан йүнәлтелә һәм уҡып бөткәндән һуң ҡайтып, мотлаҡ 3 йыл эшләргә тейеш) буйынса, быйылдан башлап, Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың 9 Майҙағы

Указына ярашлы, бюджет урындарының 10 проценты Донбаста һәм Луганскиҙа махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан хәрбиҙәрҙең балаларына бирелә. Ҡалған 70 процент урындар дөйөм конкурс буйынса бүленә. Быйыл магистратураға өҫтәмә рәүештә 116 (бөтәһе - 315) бюджет урыны бирелде. Көндөҙгө бүлектә уҡыусы магистранттарға ҙур булмаһа ла стипендия бар: 3,5 мең һум.

**➔ Хәҙер ауыл хужалығы продукцияһын етештереүселәргә иғтибар бер ни тиклем арта. Колхоз-совхоздар булмаған урындарҙа берләшеп, кооперативтар төҙөү хуплана. Кооперативтар менән етәкселек итеү өсөн дә кеше, белем кәрәк. Һеҙҙең студенттарға ошо йүнәлештә белем биреләме?**

- Беҙҙә иҡтисад профиле бар, әммә бюджет урындары юҡ, уҡыу түләүле. Унда "Иҡтисад һәм предприятие менән идара итеү" һөнәре бар. "Агрономия" специальносында агрономдар ғына әҙерләнмәй, механизатор, иҡтисад нигеҙҙәренә, бизнес-проекттар төҙөргә, нисек эшҡыуар булырға, предприятие менән идара итергә өйрәтәләр. Ҡыҫҡаһы, барлыҡ профилдәр ҙә заманға яраҡлаштырылып, заман талаптары менән бәйле ихтыяждарҙы ҡуҙаллап уҡытыла.

**➔ Аграр университет тиһәк тә, унда бит тик ауыл балалары ғына белем алмай. Ауылдан килгән студенттарҙың нисбәте күпме?**

- Йылдан-йыл ауылдарҙа балалар һаны кәмей, шуға беҙҙең күрһәткестәр ҙә үҙгәрә. Әлеге ваҡытта дөйөм контингенттың 70 проценты - ауылдан сығыусылар, 30 проценты ҡаланыҡылар.

**➔ Башҡортостандың ҡайһы төбәгенән һеҙҙең уҡыу йортона өҫтөнлөк бирәләр?**

- Районлар буйынса әйткәндә, Стәрлебаш, Ҡырмыҫҡалы, Шишмә, Саҡмағош, Кушнаренко, Илеш, Баймаҡ районларынан күп киләләр. Республиканың барлыҡ районларынан да студенттар бар, әммә атап әйткән районлардан килеүселәр күберәк.

**➔ Медицинала "тар һөнәр" тигән термин бар. Бөгөн бик кәрәкле һәм һеҙҙә уҡырға мөмкин булған ниндәй һөнәрҙе әйтеп китер инегеҙ?**

- Бизнес-информатика тиер инем, сөнки бөгөн IT-технологиялар өлкәһендә эшләүселәр кәрәк һәм уларға 27 йәшкә тиклем әрме хеҙмәтенә саҡырылыу кисектерелә. Бында шуны ла әйтеп китергә мөмкин: егеттәргә вузды тамамлағансы әрме хеҙмәте кисектерелә. Шулай уҡ производствола ҡулланылған кәрәкле геодезист һөнәре буйынса белем бирәбеҙ. Был һөнәрҙе һайлаусылар уҡыуҙарын тамамлағандан һуң ҙур эш хаҡы алып эшләйҙәр, йәғни бик кәрәкле һөнәр эйәләре булып һаналалар.

**➔ Ата-әсәләр бик йыш Башҡортостандағы юғары уҡыу йорттарында уртаса, йәғни үтеү балының бик юғары булыуын, ә башҡа төбәктәрҙә уның түбән булыуын белдерә. Һеҙҙә ошо уртаса балдың күләме күпме?**

- Уртаса балл өс имтихандан 170-тән башлана. Әгәр ошо кимәлдән түбәнерәк булһа, абитуриент бюджет урындарына дәғүә итә алмай. Тағы шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: әгәр юғары баллы абитуриенттар күп булһа, әлбиттә, дәғүәселек тә көслө була һәм 170 баллылар ҙа үтмәй ҡалыуы ихтимал. Бында тағы шәхси ҡаҙаныш тигән пункты ла иҫәпкә алырға кәрәк. Мәҫәлән, ГТО-ның алтын миҙалға тапшырған икән - 10 мәрәй өҫтәлә. Мәктәпте тик яҡшы билдәләренә генә тамамлағандарға ла 10 балл өҫтәлә.

Тағы бер мөһим мәл: уҡыусылар БДИ тапшырып, мотлаҡ билдәле бер күләм йыйырға тейеш, йәғни билдәле бер кимәл икеле билдәһенә тура килә һәм ундайҙар аттестат алһа ла, юғары уҡыу йортона инә алмай. Беҙҙең вузда БДИ-ның минималь кимәле башҡа вуздар менән сағыштырғанда түбәнерәк, сөнки беҙ Мәғариф һәм фән министрлығына түгел, ә РФ-ның Ауыл хужалығы министрлығына буйһонабыҙ һәм күрһәткестәрҙе улар билдәләй. Әгәр уҡыусы башҡа вузға инә алмаһа, беҙгә инергә мөмкин.

**➔ Сит ил студенттарын да ҡабул итәһегеҙме?**

- Аграр университетта сама менән 1 процент тирәһе сит ил студенты бар. Нигеҙҙә, яҡын сит илдәрҙән киләләр: Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстандан. Улар үҙҙәренең ватандашлыҡ икәнлеген иҫбат итһә, дөйөм бюджет урындарына инә ала. Шулай уҡ Африка, Яңы Гвинея, Мозамбик, Йемен, Афғанстандан студенттар бар. Улар айырым квота буйынса уҡырға инә, йәғни уларға дәүләт, Мәскәү айырым урын бирә һәм беҙҙең бюджет урындарына дәғүә итмәй. Хатта улар инеү имтихандарын да Мәскәүҙә тапшыра.

**➔ Сит ил студенттарына стипендия бюджеттан түләнәме, уларға ла йәшәргә, ашарға кәрәк бит...**

- Беҙ федераль бюджеттан финансланабыҙ, шуға улар ҙа башҡа студенттар менән бер иш стипендия ала, әммә улар социаль стипендияға дәғүә итә алмай.

**➔ Кеше ғүмер буйы уҡырға тейеш, тиһәк тә, йәш саҡ - дәртле саҡ, йәштәрҙең төрлө секциятүңәрәктәргә лә йөрөгөһө килә...**

- Университеттың матди базаһы бик яҡшы. Спорт залдары бик күп, ике бассейн бар. Физкультура-һауыҡтырыу комплексындағы бассейнда 8 юл, тәрәнлеге 6 метрға тиклем. 1150 урынлыҡ Йәштәр мәҙәниәт һарайы ла аграр университет ҡарамағында. Рәсәй Федерацияһында шундай ҙур концерт заллы мәҙәниәт һарайы булған уҡыу йорттары бик һирәк. Был мәҙәниәт усағында 15-16 коллектив шөғөлләнә: вокал, бал бейеүҙәре, халыҡ бейеүҙәре, ҡурайсылар, КВН-сылар һ.б.

Ятаҡтарға килгәндә, вуздың 8 ятағы бар, уларҙа шарттар яҡшы. Һәр студентты - бюджетта уҡыусыларҙы ла, коммерция нигеҙендә уҡыусыларҙы ла ятаҡ менән тәьмин итәбеҙ. Түләү - уҡыу йылына 5 меңдән алып 10 меңгә тиклем. Сумма ни өсөн айырыла, сөнки коридор системаһындағы ятаҡтар, бер нисә бүлмәгә бер бәҙрәф, душ бүлмәһе булған секциялы ятаҡтар һәм барлыҡ уңайлыҡтары булған бүлмәләләр бар.

**➔ Сит илдәрҙә уҡыу йорттары ҙур территориялар биләй һәм студенттар тәнәфестәрҙә, дәрестәр булмағанда корпустар эргәһендәге сирәмгә сығып ял итә, ултырғаны ултыра, ятҡаны ята, уҡыға-ны уҡый, тигәндәй...**

- Беҙҙең ундай территория бар, әммә ул сит күҙҙәрҙән ябыҡ. Тиҙҙән уны парк зонаһы итеп, ҡала халҡы өсөн дә асырға ниәтләйбеҙ. Унда беседкалар бар, эскәмйәләр ҡуйылған, территория йәшеллеккә күмелгән. Ауыл хужалығы техникаһынан төрлө экспонаттар урынлашҡан. Ошо паркта үҙебеҙҙең метеостанция, мәғлүмәт таҡталары бар.

**➔ Ауыл хужалығы һөнәрҙәре тап ауыл хужалығында практика талап итә. Ошо гәмәли өлөш нисек, ҡайҙа тормошҡа ашырыла?**

- Районларҙа ауыл хужалығы предприятиелары Ауыл хужалығы министрлығына заказ бирә һәм ошо заказ буйынса күрһәтелгән ваҡытҡа беҙ практиканттар ебәрәбеҙ. Практика үтерлек базалар, урындар бар, хатта бик йыш кеше етмәй, йәғни ойошма һораған күләм булмай сыға.

Элек практикаға сит илдәргә сығыу мөмкинлеге бар ине, хәҙерге хәлдәр арҡаһында был мөмкинлек ваҡытлыса сикләнде, ләкин артабан хәл яҡшырыр тип өмөтләнәбеҙ. Беҙҙә совет заманындағы кеүек һаман да студент отрядтары эшләй. Һәр бер факультеттың үҙенең профилле төҙөлөш студент отряды бар һәм хатта механизация отряды егеттәре йәйге ураҡ эштәрендә ҡатнашып, енеүсе булып, машиналар алған осраҡтар ҙа бар. Ҡайһы бер отрядтар төрлө факультет вәкилдәрен берләштерә. Студенттар студент отрядтарында ҡатнашып, эш хаҡы ла ала, практика үтеп, тәжрибә лә туплай, йәғни түләүле практика килеп сыға инде.

**➔ Бөгөн бөтә нәмә халыҡ уңайлылығы өсөн эшләнә, ти етәкселәр һәр сығышында. Абитуриенттар һәм буласаҡ абитуриенттар өсөн тағы ниндәй "фишкағыҙ" бар?**

- Әгәр башҡа уҡыу йорттары эргәһендә транспорт сараһын ҡайҙа ҡалдырырға белмәй, парковка эҙләргә тура килһә, БДАУ-ҙың үҙенең ҙур автотуҡталҡаһы бар. Мәҫәлән, ҡунаҡтар йәки абитуриенттар килгәндә, улар алдан шылтыратып һөйләшә лә, транспортын ошо парковкаға индереп ҡуя. Йыл дауамында уҡыусылар менән һөнәри йүнәлеш саралары уҙғарғанда ла уңайлы - автобустар, машиналар менән килеүселәр транспорт сараларын ҡуйырға урын эҙләп баш ватмай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балыҡ - тәрәнде, кеше яҡшыны эҙләй, тиҙәр. Бында "яҡшы", моғайын да, "уңайлы" тигәнде аңлаталыр. Яңы формация вәкилдәре уңайлылыҡҡа өйрәнгән һәм Башҡорт дәүләт аграр университеты үҙенең буласаҡ студенттарына төрлө уңайлыҡтар, яңы мөмкинлектәр тәҡдим итә. Белгестәр билдәләүенсә, донъялағы хәлдәр һөҙөмтәһендә ауыл хужалығына иғтибар тағы ла артасаҡ, тимәк, заманса ҡарашлы ауыл хужалығы белгестәре лә талап ителәсәк. Ә инде һайлау - һәр кемдең үҙ ҡулында!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Кеше аңы нимәгә һәләтле?

Кешенең барлыҡ мөмкинлеге менән таныштырыу бурыс булып тормай, әммә ҡайһы бер ысулдар барыһына ла хас:

- беҙ уйыбыҙҙа ғына тәнебеҙҙе ташлап китә, стена аша үтә һәм алыҫ араға күсә алабыҙ;
- беҙ өйҙән йәки эш урынынан сыҡмай ғына башҡаларҙа көслө йоғонто яһай алабыҙ;
- беҙ үткәндәргә һәм киләсәккә күсә алабыҙ;
- беҙ икенсе кешенең аңына үтеп инеп, уның уйҙарын уҡый алабыҙ;
- беҙ үҙебеҙҙе һәм башҡаларҙы (ситтән тороп) дауалай алабыҙ.

Бер генә ауырлыҡ бар: быларҙың барыһына ла өлгәшергә ярҙам иткән китап ҡына юҡ. Берҙәнбер юл - мөғжизәләр тыуҙырыусы рухи юл.

Был - һеҙҙең менән тирә-яҡ мөхит араһында булған айырмалыҡты бөтөрөү, Йыһан менән берлек, уның менән гармония булдырыу.

Һеҙ оҙон юлды ҡыҫҡа ваҡытта үтеү һәләтегеҙгә инандығыҙ, әммә мөмкинлектәрегеҙҙең сигенә етмәнегеҙ әле.

Шулай итеп, беҙҙең ғүмер камиллығына өлгәшмәгән әле. Тормош байлыҡ, бәхет һәм уңыш яғына үҙгәрһен өсөн өмөт, ышаныс һәм уға ынтылышты юғалтмағыҙ. Һәр кире уй ыңғай үҙгәрештәрҙе өҙөргә һәләтле.

## Сәләмәтлек - тормош сифаты билдәһе

Был хаҡта яҙғанда мин ҡатынымдың бынан ике быуат элек Латвияның Паланга ҡалаһында йәшәгән нәҫеле, тылсымсыһы һәм дауалаусыһы Бессиҙың ярҙамын файҙаландым.

Латыш халҡы XIII-XVI быуаттарҙа, тевтондар хакимлыҡ иткән осорҙа бер нисә боронғо Балтика ҡәбиләләре берләшеүенән һуң тыуа. Был халыҡ көсө, ҡаһарманлығы, ныҡлы сәләмәтлеге менән айырылып торған һәм ул йырҙарында ла сағылыш тапҡан. Хәҙер килтерерәсәк кәңәштәр ҙә йыр булырға хаҡлылыр, тип уйлайым.

Бесси XIX быуат башында тыуа. Бала сағында уҡ үҙен һәләтле рәссам итеп таныта, һуңыраҡ инде психик һәләттәре һәм дауалау һәләте асыла. Уға кешеләр алыҫ-алыҫтарҙан изге кәңәш һорап килә. Әммә Бессиҙың төп хәстәрлеге булып кешеләрҙең сәләмәтлеге тора. Шифалы үҫемлектәр, дарыу үләндәре тураһындағы белем уға әсәһенән күсә һәм ғүмере буйы хеҙмәт итә. Ниндәйҙер кимәлдә ул үҙе уҡ 105 йәшкә етеп, белеменең тере шаһиты була.

Бер нисә йыл элек Таллинда булғанда мин ҙур дауаханаға индем. Бинаның һуңғы ҡатында ҙур рәсемдәр галереяһы урынлаштырылғайны. Дауахана пижамалары кейгән пациенттар ижад өлгөләре алдында ултыра һәм медитация үтә ине. Һәр ауырыуға үҙенең сире үҙенсәлегенә тап килгән теге йәки был картинаны "тәғәйенләйҙәр". Ысынлап та, һүрәттәр һәм музыка һауыҡтырыу көсөнә эйә.

## Аңдың һауыҡтырыу көсө

Аң ауырыу тыуҙырырға ла, уларҙы дауаларға ла мөмкин. Бер юморист юҡҡа ғына: "Тәбиғәт һауыҡтыра, ә табиптар иҫәп яҙып бирә", - тимәгән бит.

Әгәр һеҙ сирләп тораһығыҙ йәки үҙегеҙҙе насар тояһығыҙ икән, табипҡа йүгерергә ашыҡмағыҙ. Тәү сиратта, күңелегеҙҙе күҙҙән үткәрегеҙ. Насар тойоуҙың сәбәбе тәбиғәт түгел, үҙегеҙ булыуы мөмкин.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



### 11 ИЮЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Х/ф "Романовы. Венценосная семья". [0+]
2.40 Т/с "Письма на стекле. Судьба". [12+]
4.23 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Д/ф "Полюс времени". [12+]**
**9.00 Үткән гүмер. [12+]**
**9.30 "Это Родина моя!" Концерт. [12+]**
**10.00 "Кумысный путь". [6+]**
**10.15 Х/ф "Колонкай". [6+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Спектакль "Два берега бытия". [12+]**
**13.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**14.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00 "Вековая связь поколений". 100 лет профсоюзам Республики Башкортостан. [12+]**
**15.45 Концерт Сибайского концертно-театрального объединения. [12+]**
**18.00 История одного села. [12+]**
**18.15 Пофутболим? [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Х/ф "Радуга над деревней". [12+]**
**20.30 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Х/ф "Опустевший город". [16+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Без вины виноватые". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

### 12 ИЮЛЯ
### ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Д/ф "Цареубийство. Следствие длиною в век". [12+]
1.05 Т/с "Письма на стекле. Судьба". [12+]
2.45 Т/с "По горячим следам". [16+]
4.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.15 "Орнамент". [6+]**
**14.30 Хазина. [0+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Этно-краса". [6+]**
**15.30 "КультУра". [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Колесо времени. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Нык бул. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Х/ф "Пластик". [16+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.00 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**3.45 Х/ф "Пластик". [16+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

### 13 ИЮЛЯ
### СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Д/ф "Цареубийство. Следствие длиною в век". [12+]
1.05 Т/с "Письма на стекле. Судьба". [12+]
2.45 Т/с "По горячим следам". [12+]
4.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.15 "Орнамент". [6+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Х/ф "Самый лучший". [16+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.00 Спектакль "Песнь во сне". [12+]**
**4.00 История одного села. [12+]**
**4.15 Башкорттар. [6+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 14 ИЮЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.55 Д/ф "Цареубийство. Следствие длиною в век". [12+]
1.05 Т/с "Письма на стекле. Судьба". [12+]
2.45 Т/с "По горячим следам". [12+]
4.28 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.15 "Орнамент". [6+]**
**14.30 "Это моя профессия". [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Д/ф "Женское лицо Победы". [12+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Ап-асыҡ. [12+]**
**19.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башкорттар. [6+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Х/ф "Жених на прокат". [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.15 Спектакль "Близнецы". [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

### 15 ИЮЛЯ
### ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [0+]
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 "Кто против?" [12+]
21.20 Х/ф "Движение вверх". [6+]
23.55 Торжественная церемония открытия XXXI Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
1.55 Х/ф "Я буду жить!" [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Серебряный бор". [16+]**
**11.00 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бай баҡса. [12+]**
**14.00 БашГост. [6+]**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.00 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Серебряный бор". [16+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.15 Интервью. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 "Башкорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Интервью. [12+]**
**20.45 Автограф. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 БашГост. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Х/ф "Дорога перемен". [16+]**
**1.30 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**3.30 Х/ф "Дорога перемен". [16+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на баш. яз).**

### 16 ИЮЛЯ
### СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Доктор Мясников". [12+]
12.35 Т/с "Никогда не говори "никогда". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Идеальный пациент". [12+]
0.55 Х/ф "Берега". [12+]
4.00 Х/ф "Эгоист". [16+]
5.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 "Орнамент". [6+]**
**9.00 "Это моя профессия". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**11.15 Нык бул. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Бәхетнамә. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Колесо времени. [12+]**
**16.30 Концерт хореографической студии "Саптар". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Д/ф "Ишмулла". [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 Историко-культурный музейный комплекс "Шульган-таш". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.00 Х/ф "Незваные гости". [6+]**
**1.00 Новости недели (на баш. яз).**
**1.45 Спектакль "Любви все возрасты покорны". [12+]**
**3.45 Х/ф "Незваные гости". [16+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз).**

### 17 ИЮЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.35, 2.45 Х/ф "Синдром недосказанности". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 "Доктор Мясников". [12+]
12.35 Т/с "Никогда не говори "никогда". [12+]
18.00 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Путина". [6+]
4.31 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Орнамент". [6+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.00 "Дорога к храму". [0+]**
**15.30 Историческая среда. [12+]**
**16.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**16.30 К 90-летию со дня рождения народного поэта Республики Башкортостан Рами Гарипова. [12+]**
**18.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**19.00 "Избранная судьба". [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Х/ф "Сумасшедшее сердце". [16+]**
**1.00 Спектакль "Путем взаимной переписки". [12+]**
**3.15 Х/ф "Сумасшедшее сердце". [16+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1443 һижри йыл.*

| Июнь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (12) дүшәмбе | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 19:01 | 21:46 | 23:16 |
| 12 (13) шишәмбе | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 19:01 | 21:45 | 23:15 |
| 13 (14) шаршамбы | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 19:00 | 21:44 | 23:14 |
| 14 (15) кесе йома | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 19:00 | 21:43 | 23:13 |
| 15 (16) йома | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 18:59 | 21:42 | 23:12 |
| 16 (17) шәмбе | 3:32 | 5:02 | 13:30 | 18:59 | 21:41 | 23:11 |
| 17 (18) йәкшәмбе | 3:33 | 5:03 | 13:30 | 18:58 | 21:39 | 23:09 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ВЕНГРИЯ ЖУРНАЛЫНДА...

## башҡорттар тураһында

**Быйылғы февраль һанында Венгрияның "Глобус" журналында башҡорттар тураһында ҙур мәҡәлә донъя күрҙе. Мәҡәләне яҙыуға Матьяш Селлисиҙың 2019 йылда Башҡортостан буйлап сәйәхәт иткәндә төшөргән алған фотоһүрәттәре нигеҙ булған.**




Көньяҡ Уралда йәшәгән халыҡ хаҡындағы мәҡәләгә тексты венгр этнографы Жолт Ботлик яҙған. Журналдың Фейсбук битләүендәге анонсында: "1220 йылдарҙа Монгол империяһы башҡорт ерҙәренә барып еткән һәм бер нисә йыл һуғыштан һуң ғына ул ерҙәрҙе баҫып алыуға өлгәшкән. Сыңғыҙхандың вафатынан һуң иждат ителгән "Монголдарҙың серле хикәйәте"ндә ("Сокровенное сказание монголов") башҡорттар иң ҡаһарман халыҡтар исәбендә телгә алына", - тип яҙылған. Этнограф Ж.Ботлик башҡорттарҙың килеп сығышы, дине, мәҙәниәте, уларҙың үҙаллылыҡ яуларға тырышыуҙары һәм Рәсәйҙә тотҡан урындары тураһында яҙған.

Шулай уҡ башҡорт теле тарихын да бәйән иткән.

Венгр рәссамы Матьяш Селлеси Башҡортостанға тәүге тапҡыр профессор Аттила Түрк етәкселегендәге археологик экспедиция менән килгән. Унан фотопроектын тормошҡа ашырыу өсөн Венгр сәнғәт академияһының нәфис стипендияһын - грантын алыуға өлгәшкән. Проект сиктәрендә ул Башҡортостанды һәм башҡорттар күпләп йәшәгән республикаға сиктәш төбәктәрҙе йөрөп сыҡҡан. Уны башҡорттарҙың ҡәҙимге йәшәү рәүеше, быуаттар төпкөлөнән килеп еткән ғөрөф-ғәҙәттәре ҡыҙыҡһындырған. Фоторәссам булараҡ ул шулай уҡ башҡорт-мадьяр бәйләнешен дә сағылдырған. Венгрҙар үҙ тамырҙарын башҡорттар менән бер тип һанай. Быны бер нисә факт аша сағылдырырға мөмкин. Мәҫәлән, венгр телендә төрөк сығышлы 300 тирәһе һүҙ бар. Шулай уҡ ике халыҡта ла исемдәре бер төрлө яңғыраған ҡәбиләләр бар. Улар дьярмат, еней, юрми, буляр һәм башҡалар.

2019 йылдың сентябрендә Матьяш Әбйәлил, Миәкә, Стәрлебаш, Хәйбулла райондарында булып, урындағы фольклор менән танышҡа. Уның объективына башҡорт халыҡ уйындары, милли аҙыҡ - ҡоротто - әҙерләү, ҡайын һағыҙы ҡайнатыу, "Кот саҡырыу", "Килен һөйөү", "Никах туйы" йолалары, кәзә дебетенән шәл бәйләү, кейеҙ баҫыу һәм башҡорттар тормошонан башҡа ҡыҙыҡлы ваҡиғалар эләккән.

СИТТӘР БАҺАЛАЙ

# ЕКАТЕРИНБУРГТА...

## башҡорт ҡыҙҙары портреттары күргәҙмәһе

**Башҡорт милли костюмдарындағы ҡыҙҙарҙың портретын яҙ көнө Свердлвск рәссамдары төшөргәйне. Оҫталыҡ дәресен Башҡортостандың Халыҡтар дуҫлығы йорто филиалы - Свердловск өлкәһендәге Башҡорт тарихи-мәҙәни һәм "Беҙ бергә" мәҙәни проекттар һәм башланғыстар үҙәктәре ярҙамында Евгений Гладиновтың студияһы ойоштторҙо.**



- Бөтәһе лә бик матур булды! Хеҙмәттәшлеге өсөн Светланаға рәхмәтемде белдерәм. Башҡорт халҡы минең өсөн сағыу һәм үҙенсәлекле. Башҡорт кейеменең матурлығын күрһәтергә теләнем. Ул мине ауырлыҡ рухы һәм ҡыйыулыҡ, баҫалҡылыҡ һәм ғорурлыҡ кеүек һыҙаттарҙы сағылдырыуы менән иғтибарымды йәлеп итте. Оҫталыҡ дәрестәрендә төрлө стилдә һәм төрлө материалда яҙған 8 рәссам ҡатнашты. Беҙ башҡа милләттәр өсөн дә портреттар яҙабыҙ. Мари, ҡаҙаҡ халыҡтары вәкилдәренең портретын төшөрҙөк, сыуаштар менән дә эшләргә ниәтләнәбеҙ. Әммә башҡорттарҙың портретын яҙыу айырыуса оҡшай. Костюмдар бик сағыу! Ҡыҙыл төҫ! Затлы тире! Көмөш! Портрет яҙыу өсөн Гөлйөҙәм менән Оксана саҡырылды. Эш барышында моделдәрҙең башҡорт халҡының тарихы һәм костюмдың элементтары хаҡында һөйләүе бигерәк тә отошло булды, - тине рәссам, художество студияһы етәксеһе Евгений Гладинов.

- Рәссамдар менән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарында француз яулыҡтары һәм коралдарҙың нисек килеп сығыуы тураһында фекер алыштыҡ. Студияла йылы мөхит урынлашты, рәссамдарҙың һөнәрилеге иғтибарҙы йәлеп итте, - тине Гөлйөҙәм.

- Мин беренсе тапҡыр ҡатнаштым. Бер нөктәгә текәлеп оҙаҡ ултыра алмаҫмын тип уйлағайным. Әммә тәүге сәғәте бик тиҙ үтте. Рәссамдар минең йөҙөмдөң параметрҙарын үлсәне, төрлө стилдә төрлө материал менән төшөрҙөләр. Портреттар төрлөсә килеп сыҡты, барыһы ла оҡшаны. Шулай ҙа мин үҙемдә Евгений Гладиновтың портретында күрҙем. Ул бик күренеп тормаған минең холҡомдо аныҡ бирә алған. Тыштан - нәзәкәтле ханым, ә эстән атай-олатайҙарыбыҙҙың көслө башҡорт рухын! Шуның өсөн Евгенийға рәхмәт! - ти Оксана.

- Башҡорт ҡатын-ҡыҙының матурлығына дан йырлаған матур проект килеп сыҡты. Был картиналарҙы Екатеринбург ҡалаһының Горький урамындағы 4а һанлы йортта урынлашҡан "Рәсәй тураһында һөйөү менән" тип аталған күргәҙмәлә күрергә мөмкин, - тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһының Халыҡтар дуҫлығы йорто филиалы етәксеһе, "Беҙ бергә" мәҙәни проекттар һәм башланғыстар үҙәге директоры Светлана Ҡолмырҙина.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫҒА - ҺҮҘ...

## яманға сүп эйәрә

Йөҙ күтәреп кешенән теләнгәнсе, башыңды эй ҙә ерҙән һора.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бары тик хыял ғына ояла белмәй.

**(Джон Донн).**

Тәбиғәттә тамыр - дымға, ағас олоно ҡояшҡа тартыла, үҫемлек шулай берәүҙең икенсене ҡәнәғәтләндермәүе һәҙәмтәһендә формалаша.

**(Поль Валери).**

Шарап менән артыҡ мауығыу барлыҡ лайыҡлы нәмәләргә ишек яба һәм барлыҡ күңелһеҙлектәргә, сирҙәргә ишек аса.

**(Валерий Максим).**

Матур нәмәләрҙән матур мәғәнә эҙләүселәрҙә беҙҙең барлыҡ өмөт.

**(Оскар Уайльд).**

Дуҫлашыуҙың юл башында - маҡтау, дошманлашыуҙың юл башында тәнҡит тора.

**(Император Бөйөк Василий).**

Дуҫыңа хыянат - бер ниндәй аҡланыу һәм кисереү мөмкин булмаған енәйәт.

**(Лопе де Вега).**

Беҙҙең хәстәрлектәр киләһе быуындарға ла ҡалһын әйҙә.

**(Публий Марон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше ауыл халҡы алдында ғәйепле тип табыла. Ғәйепләне соҡорға ташлайҙар, ә унан зыян күргән ауылдаштарҙың һәр береһе уны үҙе теләгәнсә хөкөм итергә тейеш була. Быны берәүҙәр соҡор ситенә баҫып, ғәйеплегә төкөрә, икенселәр бысраҡ ташлай, өсөнсөләр серек йомортҡа ырғыта. Ә бер кеше соҡор төбөндәге ғәйепләнеүсегә тос ҡына таш бәрә. Ғәйепләнеүсе унан аптырап һорай:**

**- Мин бындағы кешеләрҙең барыһын да беләм, уларҙы мин ысынлап та рәнйеттем һәм уларҙың минән алыр үсе бар. Ә һин миңә таш ташлайһың?**

**- Ә һин мине бынан егерме йыл элек рәнйеткәйнең, - ти кеше.**

**- Улай булғас, егерме йыл буйы ҡайҙа булдың һуң һин?- тип аптырап һорай ғәйепләнеүсе.**

**- Ошо йылдар буйы мин әле һиңә бәргән ташты йөрәгемдә йөрөттөм, - ти таш ташлаусы.- Быны хәҙер һине шундай меҫкен хәлдә күргәс, ул ташты йөрәгемдән алып, һиңә олаҡтырҙым..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22027

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мажит Ғафури урамы, 4, офис 203).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 8 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3007
Заказ - 844